ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 ғинуар (һыуығай) 2021

№4 (942)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреркә

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы йылда ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыуығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Йәнәшәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында баҫмабыҙға яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, иҫкәртә күрегеҙ: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, уны марттан алдыра башлаясаҡтар. ПР905 индекслы баҫмабыҙ дүрт айға 483 һум 72 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ат уйнатып алдан бара...**



6

**Элекке сүплектәр һағындыра,** йәки Донъя цивилизацияһы һәр саҡ яҡшығамы?..



8-9

**Кәзә аҫраған, шәл бәйләгән...** мохтажлыҡта йәшәмәҫ



11

**Һиҙмәй ҙә ҡалды...** "йәшел йылан" тырнағына эләккәнен



12-13

**ТВ-программа** 14


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? РФ Дәүләт Думаһы депутаттары айныҡтыҫтар системаһын тергеҙеү тураһында тейешле закон ҡабул итте. Был әҙмәл кәрәк инеме һәм был айныҡтыҫтар бөгөн ниндәйерәк булырға тейеш?

***Фәтхулла ИБРАҺИМОВ, хеҙмәт ветераны:*** Был һорауға ҡапылда "юҡ" йә "эйе" тип бер төрлө генә яуап биреүе ҡыйын, әлбиттә. Бер яҡтан, ул кәрәк тә кеүек, сөнки ошо хаҡтағы закон проектында әйтелеүенсә, был учреждениелар кеше именлеген һаҡлау кеүек гуманлы маҡсатты күҙҙә тота. Эсеп, һәр төрлө бәлә-ҡазаға осрап, туҡмалыу, таланыу осраҡтары, йә булмаһа өйөнә ҡайтып етә алмай, аяҡ-ҡул бармаҡтарын туңдырып, хатта үҙҙәре туңып үлгән кешеләр ҙә бик күп. Ошо йәһәттән улар эш үтмәҫ элек, ваҡытында әлеге айныҡтыҫтарға барып эләгә ҡалһа, бәхеттәре лә бит, тик уларҙың барыһын да эҙләп-аулап йөрөүселәр юҡ, үҙәк урамдан ғына елдереүсе патруль йә башҡа төрлө хеҙмәттәрҙең күҙенә салынмай, аулаҡ урында йә йорттар араһында ятып ҡалыусылар ҙа буласаҡ. Уларҙы кем ҡотҡарыр?

Икенсе яҡтан ҡараһаң, айныҡтыҫтар асыла торҙо, ябыла торҙо, ә бына бөгөн, заманалар бермә-бер ҡатмарлашҡан осорҙа, көн тәртибендә иң тәүҙә әҙәм ғүмерҙәрен яман сирҙән ҡотҡарып ҡалыу бурысы торғанда, финанс ҡыйынлыҡтар мәлендә асылһа ла, оҙаҡ эшләрме һуң улар? Был учреждениелар өсөн ҡаҙна аҡсаһы бүленеүе икеле, тимәк, улар шәхси ҡулдарҙа буласаҡмы? Эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ мәлендә айныҡтыҫҡа эләккән клиенттарҙың түләү мөмкинлектәре һорау тыуҙырмаймы икән? Дөрөҫ, аҡсаһы булмағандарҙы мәжбүри эштәргә йәлеп итеү мәсьәләһе лә ҡарала, буғай, тик бынан айныҡтыҫтар ниндәй килем аласаҡ һуң? Тап ана шул килем килтермәгәнлектән, ҡала муниципалитетынан финанс ярҙам булмау сәбәпле, бынан 12 йылдар самаһы элек Өфөлә асылған яңы типтағы айныҡтыҫ күп тә эшләмәй, ябылып та ҡуйғайны. Тарих ҡабатланмаҫ тип кем ышандыра ала?

***Сәмәрә ШАФИҒУЛЛИНА, йорт хужабикәһе, Белорет районы:*** Айныҡтыҫтар, ғәҙәттә, ҡала һәм район үҙәктәрендә эшләй, ә эскелек осраҡтарының ҡап яртыһы (ә бәлки, күберәге) ауыл ерҙәрендә теркәлә. Ауыл - ҡала түгел, ҡырын тейәп алған ауыл кешеһе, һәр хәлдә, ауа-түнә булһа ла өйөнә ҡайтып етә лә алыр, ләкин ҡыш көндәре туңып ятыусылар ҙа йыш осрай. Бының менән мин ауылдарҙа ла айныҡтыҫ кәрәк, тип әйтергә йыйынмайым, был мәғәнәһеҙ һүҙ булыр ине. Тик шулай ҙа мине ауыл эскеселәре ҡылығы бик борсой. Уйлап ҡараһаң, ауыл эскеселәре проблемаһы менән шөғөлләнгән бер кем дә юҡ. Шул арҡала күпме бәлә-ҡаза тыуып тора, күпме ғаилә ҡыйырһытылып, күпме ҡатындар туҡмалып көн күрә. Эскесе бында үҙен бик тә иркен тота: үҙе баш, үҙе түш, сөнки бындай ҡылыҡтары өсөн бер ниндәй яза ла юҡ уға. Әлегесә, эскән килеш берәй ҡаты енәйәт ҡылып, хөкөмгә дусар ителмәһә генә, әлбиттә. Ундай фажиғәләр ҙә йыш була ауылдарҙа - район үҙәгенән полиция килеп, алып китәләр.

Ә бына даими рәүештә ҡыйырһытылып, өйҙән ҡасып сығып китеп, икенсе ошондай осраҡҡа тиклем йәнен ҡулына алып йәшәгән ғаиләләрҙе кем яҡлар? Ауылда полиция юҡ, тиҙ ярҙам йә булмаһа янғын һағы юҡ, ауыл хакимиәтенең дә бер ниндәй ярҙамы юҡ. "Айыҡ ауыл" конкурстары үткәргән, шунда ҡатнашҡан булабыҙ, ләкин уларҙың да күбеһе күҙ буяу өсөн генә, тип уйлайым мин. Дөрөҫ, был осорҙа күп файҙалы эштәр башҡарыла ауылда. Айыҡлыҡ өсөн, ә эскелеккә ҡаршы түгел, сөнки был яман ғәҙәт һәр ауылда ла бар, тик уның менән ныҡлап ҡына шөғөлләнеүсе юҡ. Ауыл эскеһенең кем айнытыр?..

**(Дауамы 2-се биттә).**

## АФАРИН!

# ХИМИЯНЫ БЕЛЕҮ КӘРӘК!

**Ошо көндәрҙә Өфөлә химия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһының төбәк этабы үтте. Өфө дәүләт нефть техник университетында 9-11-се синыф уҡыусылары белем кимәлен һынаһа, 7-8-се синыфтар (юниорҙар) Республика инженер лицей-интернатында ярышты.**




Быйылғы олимпиадала 9-11-се синыфтарҙан барлығы 130 уҡыусы төбәк кимәлендә белемен һынаған, ә бына юниорҙар араһынан 70-кә яҡын уҡыусы ҡатнашҡан. Юғары синыф уҡыусылары Башҡортостандың данын Рәсәй кимәлендә яҡлаясаҡ, шуға уларҙың эштәрен тикшереү, апелляция биреү тәртибенә бәйле һөҙөмтәләр һуңғараҡ билдәле буласаҡ. Ә бына юниорҙар араһында Республика инженер лицей-интернатының 8-се синыф уҡыусыһы **Вадим Харисов** (һүрәттә) - уҡытыусыһы Айнур Ғүмәров - абсолют еңеүсе тип табылған. Шулай уҡ еңеүселәр исемлегенә Нефтекама ҡалаһының 1-се лицейынан Рәил Нурисламов һәм Әмин Ҡасимов, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се гимназияһынан Камил Ғилманов, Өфө ҡалаһы 93-сө физика-математика лицейынан Аким Бровкин ингән. "Икенсе йыл рәттән юниорҙар араһында химия буйынса республика олимпиадаһын ойоштораБыҙ. Республиканың бәләкәй ҡалаларында, ауыл мәктәптәрендә белем эстәгән һәм химия фәне менән ҡыҙыҡһынған балаға өр-яңы ҡорамалдар менән йыһазландырылған заманса лабораторияла эшләп ҡарау, Өфө дәүләт нефть техник университеты, "Аврора" БР Һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге һәм беҙҙең лицей-интернат тормошо менән танышыу мөмкинлеге биреү маҡсатынан эшләйбеҙ быны. Быйыл һайлап алыу мәлендә 1000-дән артыҡ бала ҡатнашҡайны, шуларҙың 70-кә яҡыны икенсе этапҡа үтте. Абсолют еңеүсегә һәм призерҙарға дипломдар, иҫтәлекле бүләктәрҙән тыш "Изотоп" лагерына саҡырыу ҙа тапшырылды", - тине сара тураһында Республика инженер лицей-интернатының инновацион эштәр буйынса директор урынбаҫары Айнур Әмирханов.

12+

✓ *Айнытҡыстар урынына наркология бүлектәренең эшмәкәрлек өлкәһен киңәйтергә һәм үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Хроник эскеселәрҙе ошонда уҡ стационарға һалып, дауалап сығарыу мөмкинлеге лә булырға тейеш.*



*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*



# БЫЛ МАТУРЛЫҠ...

## килем дә килтерә

**"Иң яҡшы аҡса эшләү ысулы - түләнгән шөғөл", тиҙәр. Мин был фекер менән тулыһынса килешәм һәм үҙемә өҫтәмә килем килтереүгә булышлыҡ иткән шөғөл таптым. Бәләкәйҙән баҡсала эшләргә яраттым, үләндәр менән шөғөлләнеүҙе үҙ иттем, ләкин ҡалала йәшәүем уны киңәйтергә мөмкинлек бирмәне. Шуға күрә үҙем өсөн флорариумдар эшләү ысулын астым. Тәүҙә күңел өсөн генә булышһам, аҙаҡтан заказ буйынса эшләй башланым. Хәҙер был эшкә ныҡлап тотондом һәм заказдар һаны ла артты.**

Флорариум - үҙенең экосистемаһы булған, быяла эсендә үҫеүсе үҫемлектәр донъяһы. Ләкин мин уны ябай ғына шөғөл итеп ҡарамайым, сөнки оҫта ҡулдарға "эләккән" флорариум ысын мәғәнәһендә сәнғәт өлгөһө булырға мөмкин. Уны эшләгәндә мин бөтә оҫталығымды, таһыллығымды һалып эшләйем, бар күңелем менән ошо шөғөлгә "сумам".

Әле 19-сы быуат уртаһында уҡ кемдеңдер үҫемлектәрҙе быяла һауыт эсендә үҫтереү фекере тыуа һәм ул киң таралыу ала. Бөгөнгө көндә лә был матур, зауыҡлы шөғөл менән булыусылар етерлек. Хәҙер үҫемлектәр быяла һауыт һәм вазаларҙа ғына түгел, ә шулай уҡ башҡа төрлө һауыттар эсендә лә үҫтерелә. Мин, ғәҙәттә, мүк һәм суккулент исемле үҫемлек ҡулланам. Шулай уҡ тропик үҫемлектәр ҙә ошондай һауыттар эсендә үҙҙәрен бик яҡшы тоя. Орхидея сәскәһе, хавортия, аптениялар ҙа флорариумда бик матур күренә һәм, иң мөһиме, улар унда үҫергә "ярата". Һәр флорариумды бер данала эшләйем. Флорариум эшләүҙең бөтә нескәлектәрен яҙып тормайым, интернет селтәрендә барыһы ла аңлайышлы итеп һүрәтләнгән.

Минең флорариумдарым бөгөнгө көндә Өфөнөң фатирҙары, йорттары һәм офистарында ғына түгел, ә сит өлкәләрҙә лә үҙ урындарын тапты. Күптән түгел баш ҡалалағы ойошмаларҙың береһе ҙур флорариум эшләргә заказ бирҙе. Унда бәләкәй үҫемлектәр түгел, ә ағастар үҫәсәк, тип күҙаллайбыҙ.

Бәләкәй флорариумдарҙың хаҡы, ҡатмарлығына, ҙурлығына, ниндәй сәскә һәм үләндәр, һауыт ҡулланылыуына ҡарап, 1000 һумдан башлана. Иң ҡиммәт хаҡҡа һатҡан флорариумым 25 мең һум булды.

Гәзит уҡыусылар араһында ла ошо эшкә тотоноусылар булыр, тигән ышаныстамын, сөнки ул махсус белем талап итмәй, ҡуртымға офистар алыу кәрәкмәй, үҙ яйыңа һәм ваҡытыңа ҡарап, матурлыҡ тыуҙыраһың һәм килем алаһың.

**Зариф АБДУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

***РФ Дәүләт Думаһы депутаттары айнытҡыстар системаһын тергеҙеү тураһында тейешле закон ҡабул итте. Был ғәмәл кәрәк инеме һәм был айнытҡыстар бөгөн ниндәйерәк булырға тейеш?***

***Ришат АБДУЛЛИН, ташсы, Өфө ҡалаһы:*** Беҙҙең һөнәр еңелдән түгел: торлаҡ йорттар, хужалыҡ объекттары - ҙур-ҙур биналар төҙөйбөҙ. Ҡышҡы селләлә, ыжғыр буранда, йәйге эҫелә лә беҙ төҙөлөш участкаһында. Һыуыҡ йә ямғырҙан ҡурҡып, боҫоп ултырып булмай: беҙҙең эште кемдер килеп эшләмәйәсәк бит. Ауыр эш үҙәккә үтә, айырыуса ҡышҡы айҙар ҡыйынға тура килә. Шуға күрә, сер түгел, эштән һуң йыш ҡына "йылынып алыу" ғәҙәте йәшәп килә. Сәбәптәре лә табылып тора: кемдеңдер балаһы тыуған, кемдеңдер юбилейы, кемдер кәләш алған... Бындай "мероприятие"ға ҡайһы саҡ хатта уҫал ғына бригадирыбыҙ ҙа ҡушылып китә, тик шулай ҙа саманы онотмаҫҡа өгөтләп, тыйып ҡына тора егеттәрҙе. Иҫән-имен генә таралышабыҙ шулай өйҙәребеҙгә, тик табыла барыбер арала бер-икәү. Шундай тотанаҡһыҙҙарҙың береһе үткән йәй ҡаты ғына типкеләнеүҙән имгәнеп, дауаханала ятып сыҡты. Эштән һуң рүмкәләп ҡойоп бирә торған ергә инеп, буйтым булып сыҡҡас, эңерҙә ҡайтып барғанында быға ике егет бәйләнеп, телефонын, ҡалған ғына аҡсаһын тартып алып, үҙен һыу эскеһеҙ типкеләп киткәндәр. Ике аҙналай дауаханала ятып сыҡты. Был күңелһеҙ ваҡиға тураһында һөйләүемдең сәбәбе шул: бына ошондай осраҡтар булмаһын өсөн бик кәрәк ул айнытҡыстар. Тик миңә уларҙың эскелектең әҙемтәһе буйынса ғына эш итеүҙәре оҡшамай. Миңә ҡалһа, ғәфү үтенәм, эскеселәрҙең күберәк булыуы уларға файҙаға ғыналыр һымаҡ тойолоп китә, сөнки улар ана шул эскелеккә килтереүсе сәбәптәр буйынса эшләмәй. Был уларҙың бурысына ла инмәй, күрәһең.

Ошоға ҡағылышлы яңыраҡ интернеттан бер мәҡәлә уҡығайным. Мәскәүҙәге Наркология институты директоры Олег Зыков тигән автор, мәҫәлән, беҙгә бөгөн айнытҡыстар кәрәкмәй, тип белдерә. Уның фекеренсә, эскән кеше менән махсус белеме һәм әҙерлеге булған хеҙмәткәрҙәр, мәҫәлән, наркологтар шөғөлләнергә һәм квалификациялы ярҙам күрһәтергә тейеш. Айнытҡыстар урынына ҡала һәм район үҙәктәрендәге наркология бүлектәренең эшмәкәрлек өлкәһен киңәйтергә һәм үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Хроник эскеселәрҙе ошонда уҡ стационарға һалып, дауалап сығарыу мөмкинлеге лә булырға тейеш, тип яҙа О.Зыков. Мин был табиптың фекере менән килешәм. Эскесене бер төн ҡундырып сығарыуҙан уға бер файҙа ла юҡ, киреһенсә, зыян ғына: быны өсөн түләргә кәрәк буласаҡ. Айнытҡыстарҙы күберәк кешенең кеҫә яғы ҡыҙыҡһындыра, ә уның алама ғәҙәте барыбер үҙе менән ҡала. Ә бына наркологтар, ысынлап та, кемдәргәлер ярҙам итер ине, моғайын. Һәр хәлдә, әлеге табип-нарколог әйтмешләй, дауалау учреждениеһы булараҡ, наркологияла эскән кешегә шунда уҡ система ҡуйыла һәм уның организмы зарарлы алкоголь ағыуынан таҙартыла башлаясаҡ, йөрәк, бауыр-бөйөр эшмәкәрлеге контролгә алынасаҡ.

Рәсәйҙә ошондай йүнәлештә эшләгән махсуслаштырылған учреждениелар бар икән. Мәҫәлән, беҙгә күрше генә Татарстан республикаһының Әлмәт ҡалаһында. "Медицина детоксикациялау үҙәге" тип атала икән ул. Шул уҡ эскән, лаяҡыл иҫерек әҙәмдәрҙе был үҙәккә полиция йә булмаһа тиҙ ярҙам хеҙмәте килтерә һәм табиптар ҡулына тапшыра. Агрессив пациенттар хәүефенән табиптарҙы ҡурсалаусы һаҡ хеҙмәте эшләй. Әлеге ваҡытта был төбәктә иҫеректәргә айығырға һәм һауығырға ярҙам итеүсе тиҫтәгә яҡын ана шундай медицина үҙәге бар икән. Улар өсөн 110 койка-урын бүленгән, шулай уҡ йөҙгә яҡын персонал эшләй. Минеңсә, беҙҙә лә эште ошо йүнәлештә ойоштороп булыр ине, моғайын. Кешегә ысынлап та файҙаһы тейерлек итеп. Тик бер төн ҡунып, ни өсөндөр, етмәһә, кеҫәләрҙе "йоҡартып" сығырлыҡ булмаһын ине...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТУҒАН ТЕЛГӘ...

## нисек ылыҡтырырға




**Беҙ бала саҡта, айырыуса йәй көндәрендә, "Мин русса аңламайым…" тигән һүҙҙәрҙе әсәйем йыш ҡабатлай торғайны.**

Йәйге каникул еткәс, ҡалала йәшәүсе туғандарҙың балалары беҙгә килеп төшә. Ҡайһыны бер, ҡайһыны өсәр айға килә. Башта күберәк үҙ-ара русса аралашалар. Әммә әсәй менән һөйләшкәндә, табын янында барыһы ла башҡортсаға күсә. Сөнки әсәйем баяғы тылсымлы һүҙҙәрен әйтә һәм кескәй ҡунаҡтар беҙҙең өйҙә урынлаштырылған тәртипте ҡабул итә, хужабикәгә, уның һый-хөрмәтенә рәхмәтен үҙ туған телендә белгертә. Телевизорҙан йәки радионан да тик башҡортса тапшырыуҙар тыңлана йәки ҡарала, сөнки әсәйемдең русса аңламағанын, ишетмәгәнен барыһы ла белә. Кире ҡалаға юлланғанда башҡортсаһы тамам нығый туғандарымдың.

Өфөләге "Ете ҡыҙ" һындарына ҡарап һоҡланып ошо хаҡта хәтерләп, уйланып торҙом. Аллаға шөкөр, туғандарымдың барыһы ла ата-әсәләренә лайыҡлы кешеләр булып, халҡыбыҙ тарихын өйрәнеп, туған телде, мәҙәниәтте белеп үҫте. Мәҫәлән, ошо "Ете ҡыҙ"ҙы скульптор Хәбибрахманов менән бергә Урал Зәйнетдинов ҡустым ижад итте. Ул әсәйемдең бер туған ҡустыһы, күренекле рәссам, лайыҡлы башҡорт шәхестәрен кәүҙәләндергән "Ер рухы" триптихы авторы Рәшит Зәйнетдиновтың улы!

Телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен нисек киңәйтеү тураһында баш ватабыҙ. Башҡорт теле рус теле менән тиңә-тиң дәүләт теле булып тора республикала. Тимәк, ошоно иҫтә тотоп, төрлө саралар ҙа мөмкин тиклем башҡортса сығыш яһарға оялмау кәрәк. Һис юғы, русса һөйләшкән милләттәштәр, уларҙың балалары араһында, әсәйем әйтмешләй, "Мин русса аңламайым", тип һәр кемде туған теленә ылыҡтырыуҙан башларға кәрәк был эште. Башҡалар ни уйлай?

**Марат ӘМИНЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан вице-премьеры - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляевтың республика ҡалаларында йылытыу өсөн хаҡтарҙың артыу сәбәптәре тураһында докладын тыңлағандан һуң, ҡаты иҫкәртеү яһаны һәм йылытыу өсөн артыҡ түләүҙе асыҡлау һәм уларҙы кире ҡайтарыу буйынса эште аныҡ ойоштоторорға ҡушты.

✓22 ғинуарға мәғлүмәттәр буйынса, тәүлек эсендә республикала яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 168 осрағы асыҡланған. Төбәктә сир йоҡторғандарҙың дөйөм һаны - 22 738. Әлеге ваҡытта COVID-19 диагнозы раҫланған 659 пациент дауаханала ята, 4 678-е амбулатор шарттарҙа дауалана. Вафат булғандар һаны - 172 кеше. Был көнгә республикала тәүлек эсендә 215 кешегә "дауахананан тыш пневмония" диагнозы ҡуйылған.

✓Балет сәнғәтен үҫтереүгә тос өлөш индергән һәм традицияларҙы һаҡлап ҡалған өсөн Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының балет труппаһына Рудольф Нуриевтың исеме бирелде. Театрҙың тарихы легендар бейеүсе менән тығыҙ бәйләнгән. Тап ошонда ул үҙенең тәүге профессиональ аҙымдарын яһаған. Ошо ваҡиға уңайынан 26 ғинуарҙа Адольф Адандың "Жизель" балеты күрһәтелә.

✓Өфөлә Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондын ойоштороусыларҙың һәм Попечителдәр советының берлектәге ултырышы уҙҙы. Совет рәйесе итеп Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина һайланды. Секретары - Өфөнөң 7-се мәктәбе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлшат Ғәбитова.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта республика 18,84 мең доза "Спутник V" вакцинаһы алды, февралдә - 50,8 мең, мартта 100,7 мең доза килтереүҙәре көтөлә. 72 медицина учреждениеһы вакцинаны һаҡлау өсөн ҡорамал менән тәьмин ителгән дә инде, улар прививка пункттары булараҡ эшләргә мөмкин. Тағы 13-ө ошондай ҡорамал һатып алып, тиҙҙән прививка яһатырға теләүселәрҙе ҡабул итә башлай.

✓ *Башҡорт милли мәҙәниәте, шул иҫәптән, боронғо халыҡ кейемдәре икенсе йәшлеген кисерә, әүҙем тергеҙелә. Ошо стилдәге костюмды Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы ла тектереп кейҙе хатта һәм был уға ифрат килешә.*



БЫНАҒАЙЫШ!

# БЕҘҘӘ, ЭЙЕ, МИЛЛӘТ-АРА ТЫНЫСЛЫҠ.

## Ә кемдәргәлер был оҡшамай, күрәһең...

**Иләүгә таяҡ тығып болғаусылар табылып ҡына тора, әйтәгүр. Бөгөнгө хафалы, мәшәҡәтле заманда ла хатта. Бәгзе берәү өсөн, күрәһең, бер ни ҙә үҙгәрмәне: донъяла ла, аң кимәлендә лә. Үтеп киткән ғибрәтле йыл эсендә ысын ҡиммәттәң ни икәнен барыбер аңлап етмәне ундайҙар: бар көстәрен, ә, бәлки, яһиллыҡтарын пиар, ялған дан, исем, еңел аҡса өсөн сарыфлап маташалар.**

Кем тураһында һүҙме? Күп инде ундайҙар. Быҫраҡ юл менән үҙенән "көн геройы" яһап, үҙен "рәссам" тигән юғары исем менән атарға баҙнат иткән әлеге янъялсы А. Савельева, мәҫәлән. Бәйләнештәге комменттарҙа хаҡлы әйтелеүенсә, уның ҡылыҡтарына иғтибар итмәҫкә лә булыр ине, әлбиттә. Ләкин бындай хәлгә битараф ҡалыу дөрөҫ булмаҫ, былай ҙа елкегә менеп киләләр, ә артабан да өндәшмәһән, башыңа менеп нужаһын атҡарыр ундайҙар. Киреһенсә, мәлендә урынына ҡуйырға кәрәк уларҙы. Өндәшмәй ҡалырлыҡ булһа, ҡырылмаһа ҡырҡ эше ярылып ятҡан республика Башлығы Радий Хәбиров та илтифат бирмәҫ ине уға. Ысынлап та, милләт-ара тыныслыҡ хәүефенә янаған был "рәссам" ишаратының тап урынына күрһәтте етәксе: "хайуандарса ҡыланыш" тип атаны был хәлде. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, әйтерен бармы!

Өндәшмәй ҡалыу - бындай башбаштаҡлыҡ менән ризалашыуға тиң булыр ине. Ә бит был "рәссам" ишаратын ҡайнар яҡлаусылар ҙа табылды. Күрәһең, Башҡортостан ерендә ирәйеп йәшәп тә, ашаған табаҡтарына төкөрөп ятыусы әҙәмдәр улар. Ярай ҙа, интернет сығанаҡтарҙа ғына яҙышып, бәхәсләшеп кенә ҡалһалар. Улар бит "сәнғәтте уларса күрмәгән һәм аңламаған" оппоненттарҙы наҙанлыкта, иҫкелектә гәйепләп, карикатурага торошло әлеге һүрәттәрҙә "сәнғәткә үҙенсәлекле мөнәсәбәт" күрергә көсәнә. Үҙен индәйҙәр Өфө брендьі директоры тип таныштырған берәү хатта был хаҡта "БизнесFM-Уфа" каналына төкөрөк сәсеп интервью биреп ташланы. "Бренд, тип бер үк нәмәне тылҡый торғас, беҙ хәҙер балдан да туйҙыҡ, бер кем кеймәгән милли кейемдәрҙән, символдарҙан да ялҡтыҡ, - тине ул һәм әлеге ярым-яланғас башҡорттар һүрәте менән биҙәлгән "а-ля Аленаса" футболкалар сығарырға тәҡдим итте. Тимәк, заманса бренд, улар фекеренсә, яланғас тән булып сығамы инде? Ихтимал, был әфәнде лә башҡорттар ярҙамында үҙенә пиар эшләргә теләйҙер. Урынлы һорау тыуа: Башҡортостандың баш ҡалаһы данын, исемен күтәрергә тейешле яуаплы вазифаны башҡарыу был кешегә төҫмө? Әхлаҡ һәм сәйәси кимәле самалы кешеләр артабан да тыныслыҡты боҙоусы емергес шөғөлдәрен дауам итергә хаҡлымы? Бренд булдырыу - ул һәр йәһәттән белемле, юғары мәҙәниле, талантлы, бөтөн милләт халыҡтарына ла тиң һәм гәҙел ҡарашлы, уларҙың психологияһын, рухи ҡиммәттәрен, этник мәҙәниәтен, тарихын яҡшы белгән кешеләр эше түгелме ни? Һәр хәлдә, Өфө бренды тиклем яуаплы өлкә директоры күрергә, хәбәрҙар булырға тейеш ине: башҡорт милли мәҙәниәте, шул иҫәптән, боронғо халыҡ кейемдәре икенсе йәшлеген кисерә, әүҙем тергеҙелә. Ошо стилдәге костюмды Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы ла тектереп кейҙе хатта һәм был уға ифрат килешә. Башҡа иргеттәребеҙҙең дә яраҡлан кейем стиленә әүерелде ул.

Ә йыл һайын Өфө урамдарын тар итеп, милли кейем байрамдары үтеүе хаҡында ла бер ни белмәйме ни баяғы әфәнде? Ул ялҡҡандыр ҙа, бәлки, был уның бәләһе, ләкин башҡорт милли кейемдәре - халҡыбыҙҙың асылы, ғорурлығы, үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге, һәм уны мыҫҡыллау, уның менән кемеһе нисек теләгәнсә ҡыланыу - ғәфү иткеһеҙ хәл, сөнки был халҡыбыҙҙың битенән алыу, тотош халыҡты мыҫҡыллау. Художество кимәлен бил тиңенән аҫтараҡ итеп күргән Савельеваның, һүрәт үк булып етлекмәһә лә, урта ҡул зауыҡһыҙ был карикатураларынан һәм уның әйәрсәндәре әйткәндәрҙән сәләмәт булмаған сәйәсәт еҫе аңҡый түгелме? Етмәһә, ике һүҙҙе бәйләп һөйләй алмаған, юҡ ерҙән бар булған был "рәссам" ишараты үҙенең UTV каналына интервьюһында киләсәктә Салауат Юлаев темаһы буйынса эшләргә йыйыныуын белдерҙе. Гонаһ шомлоғо! Был иҫәрлеккә лә юл ҡуйылырмы икән ни?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**
**(Теманың дауамын 16-сы биттә уҡығыҙ).**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# МИНЕҢ РУХЫМ...

## кәмһетелеүгә юл ҡуймай

**Һуңғы осорҙа интернет селтәрҙәрендә лә, радио-телевидениелағы сығыштарҙа ла "кәмһетелеү" тигән һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр күҙгә йыш салына. Бигерәк тә әлеге бер "рәссам" ишаратының башҡорт милли кейемдәрендәге һәм биҙәүестәрендәге ярымяланғас кешеләр һүрәттәре айҡанлы асыу, нәфрәт белдергән милләттәштәр йышыраҡ ошо һүҙҙе ҡуллана.**



Беләһегеҙме, мин бер ҡасан да үҙемде кәмһетелгән башҡорт ҡатын-ҡыҙы итеп тойманым. Мин текә, үҙ дәрәжәмде белгән башҡорт ҡатыны. Минең тормош ҡиммәттәрем ҡайһы бер күңеле ярлы кешеләрҙекенән күпкә юғарыраҡ. Текә булыу гонаһмы ни? Миненсә, юҡ. Мин кешеләр менән аралашҡанда бик ябайһым, танау күтәреү минә тәҫ түгел. Әммә минең Рухым бер ваҡытта ла кәмһетелеүгә, меҫкенлеккә юл ҡуймай.

Матур, яугир, гәҙел, ҡунаҡсыл, толерант башҡорт халҡының бер вәкилемен. Йәнемдең ошо фани донъяла башҡорт ҡатын-ҡыҙы булып йәшәүҙе һайлауын оло рәхмәт тойғоһо менән ҡабул итәм. Әгәр ҙә мин мари, йә удмурт, урыҫ, татар, чечен ҡатын-ҡыҙы булып тыуһам да үҙемде шулай хис итер инем, моғайын. Ә әлеге халәтемдә минең өсөн башҡорт ҡатын-ҡыҙы булыу һәм үҙемдең тыуған телемдә, халҡым тыуҙырған мәҙәниәтте белеү, ата-бабаларҙы хөрмәтләп иҫкә алыу, тәнемдең һәр күҙәнәгендә Рух тойоп йәшәү - оло ғорурлыҡ. Башҡорт халыҡ йырҙарын яратып йырлайым, ҡурайға ихлас баҫып бейейем. Ҡымыҙ, ҡорот, талҡан, бал - йәнемә дауа биреүсе ризыҡ. Әҙәбиәт, сәнғәт, башҡорт әһелдәренең ижады алтын бөртөгөләй ҡиммәтле хазинам. Ни өсөн үҙен "рәссам", "ижадсы" тип атаған кешеләр Башҡортостанда йәшәп, минә, минең халҡыма ҡәҙерле булған төшөнсә-күренештәрҙе шулай беҙҙең йола, менталитет сиктәренән ашатлап, ҡәҙерһеҙләп һүрәтләй һәм халыҡ алдына сығара? Әллә ижадсыға барыһы ла рөхсәтме? Әллә башҡорттар бындай хәлдәрҙе артыҡ нығ күңеленә яҡын аламы? Шулай икән, нинә һуң минең бүрәт, якут, ҡаҙаҡ, украин дуҫтарым да ошо осраҡҡа бәйле хәл-ваҡиғаларға ҡарата шулай уҡ ризаһыҙлыҡ белдерә? Сөнки аҡылы, аңы булған кеше һәр халыҡтың этник һәм милли мәҙәниәте ҡағылғыһыҙ байлыҡ булыуын белә. Әгәр был һүрәттәрҙә тәндәренең кендектән түбән өлөшөн милли биҙәүестәр менән ҡаплаған урыҫ ҡыҙҙары, йә көрәшергә тип ҡосаҡлашып баҫҡан ярымшәрә урыҫ егеттәре төшөрөлгән булһа ла, мин ул һүрәттәрҙе сәнғәт өлгөһө итеп ҡабул итмәҫ инем. Был урында кешелектең ню жанрынан миҫалдар килтереү урынһыҙ. Матур яланғас тән - ул сәнғәт. Ҡулына сабый тотҡан Мадонна, Давид, Венера һәм башҡа рәсемдәрҙә бысраҡлыҡ юҡ, улар ысын сәнғәт өлгөһө.

Ошо барлыҡ хәл-ваҡиғаларҙан һуң теҙ йәки был халыҡтың ниндәй ҙә булһа биҙәүесен, кейемен, мәҙәни мираҫын - бер һүҙ менән әйткәндә, рухи һәм матди ҡиммәттәрен закон кимәлендә яҡларға кәрәк икәне бәхәсһеҙ. Һәйкәлдәрҙе, архитектура төҙөләштәрен емергән өсөн тейешле статья бар бит. Кемдәрҙер үҙҙәренең милли ыҙғышҡа килтергән ҡылығын баһалай алмай икән, тимәк, улар яҙмышын башҡаса хәл итеү кәрәк.

Ә хәҙергә бөтә башҡорттарҙы ла милли кейемдәрҙә төшкән фотоларын интернетта урынлаштырырға саҡырам. Әйҙәгеҙ, бөтә социаль селтәрҙәр донъяһында мәҙәниәтебеҙ ни тиклем зауыҡлы, рухыбыҙ нығ булыуын күрһәтәйек. Әйҙәгеҙ, үҙен, ни бары башҡортмон, тип иҫәпләүселәр кимәленә төшмәйек. Текә, үҙ дәрәжәһен белгән башҡорттар булайыҡ!

**Ләйсән МӘЗИТОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Беренсе каналдың туғыҙынсы "Голос" шоуы еңеүсеһе Яна Ғәббәсова Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы исемен алды.Йырсыға маҡтаулы исемде республика Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. Яна Ғәббәсова - Нефтекама ҡыҙы. 17 йәшлек яҡташыбыҙ илдең төп йыр проектының йомғаҡлау этабына үткән берҙән-бер ҡыҙ булды.

✓2021 йылда Рәсәйҙең алты төбәгендә - Ҡурған, Свердловск, Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә, Пермь крайында һәм Ханты-Манси автономиялы округында Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре үткәрелә. Сара барышында төрлө форматлы осрашыуҙар: тыуған ерҙән ситтә милли үҙенсәлекте һаҡлау һәм үҫтереү проблемалары буйынса фекер алышыуҙар, башҡорт диаспораһы вәкилдәренә көнүҙәк темалар буйынса консультациялар биреү, мәҙәни-ағартыу саралары күрһәтеү ойошторола. Бынан тыш, башҡорт диаспораларын матди-техник йәһәттән тәьмин итеүгә лә айырым иғтибар бирелә.

✓"Өс таған" фильмының прокатҡа сығыу көнө билдәле булды. 4 марттан Мостай Кәримдең повесы буйынса төшөрөлгән картинаны Башҡортостан һәм Татарстан кинотеатрҙарында ҡарарға мөмкин. Был хаҡта фильмдың режиссеры Айнур Аскаров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.

✓Башҡортостанда ауыр тормош хәлендә ҡалған балалар һәм үҫмерҙәр өсөн IV "Күңелем ҡылдары сыңлай" республика әҙәби-художество конкурсы иғлан ителде. Конкурста 7-17 йәшлек ижадсылар - балалар йорттарынан, социаль приюттарҙан, йорт-интернаттарҙан, коррекция үҙәктәренән балалар һәм үҫмерҙәр, инвалид балалар, етемдәр ҡатнашырға мөмкин. Конкурсты ойоштороусылар - Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана, "Хазина" хәйриә һәм мәҙәни программалар үҙәге, Дүртөйлә ҡала китапханаһы.

✓Башҡортостандың дәүләт автоинспекцияһы водителдәрҙе 2021 йылдың башынан штраф түләүҙең яңы тәртибе индерелеүе тураһында иҫкәртә. Ведомствонан белдереүҙәренсә, 1 ғинуарҙан административ түләү өсөн тәғәйенләнгән иҫәп үҙгәрҙе. Элекке 40101 8101 1000000 10001 иҫәбе ябыла һәм 031 0064 3000000 010101 ҡаҙна иҫәбе асыла. Шуға күрә 1 ғинуарҙан бюджетҡа дәүләт пошлинаһын һәм административ штрафты күсереү документтарында яңы иҫәпте күрһәтергә кәрәк. 2021 йылдың ғинуарына тиклем бирелгән штраф та яңы иҫәп буйынса түләнергә тейеш.

ҠЫҪҠАСА

# АЙЫҠ АУЫЛДАР АРТА

✓ **Башҡортостанда "Айыҡ ауыл" конкурсының республика этабы башланды.** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова билдәләүенсә, 2020 йылда конкурста бөтәһе 2114 ауыл ҡатнашты. Финалға 54 ауыл сыҡты. 2021 йылдың мартында конкурсҡа йомғаҡ яһаласаҡ. "Айыҡ ауыл" конкурсы Башҡортостан Башлығының граждандар йәмғиәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән грантына уҙғарыла. Республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡарары буйынса, быйылғы конкурстың бүләк фонды 40 миллион һумға тиклем арттырылды. Бынан тыш, райондарҙа шәхси бүләк фондтары булдырылды.

✓ **2021 йылда COVID-19 йоҡторған-дар менән эшләгән табиптар ваҡытынан алда пенсияға сығыуҙы юлларға мөмкин.** Федерация Советының социаль сәйәсәт комитеты рәйесе урынбаҫары Татьяна Кусайко һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта сирләләр менән бер ай эшләү өс айға һанала. Шуға күрә пенсияға сығыу мөмкинлеге яңынан иҫәпләнә. "Бынан тыш, уларға миллион ярым һумлыҡ автомобиль һатып алыу өсөн 375 мең һумға тиклем ташлама ҡаралған. Алдан хәбәр ителгәнсә, 2021 йылда ауыр һәм хәүефле эш урындарында эшләгән рәсәйҙәргә ваҡытынан алда хаҡлы ялға сығыу хоҡуғы бирелә. Һүҙ металлургия, машиналар эшләү һәм химия производстволары эшселәре тураһында бара. Бынан тыш, инвалидтар, Алыҫ Себер райондарында эшләгән кешеләр, күп балалы әсәләр страховка пенсияһын ваҡытынан алда тәғәйенләтеү хоҡуғына эйә.

✓ **Ғинуар аҙағында депутаттар Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында тәүге уҡыуҙа балиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән һәм дәүләттән бушлай ер алырға хоҡуғы булған граждандарға ҡағылышлы закон проектын ҡарай.** Парламент спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, документта ғаиләгә шәхси торлаҡ төҙөү өсөн ер алыуға иҫәпкә торғанда инвалидлыҡты раҫлаған документтарҙы шәхсән тапшырмаҫҡа тәҡдим ителә. "Әгәр ғариза биреүсе белешмә килтермәһә, башҡарма власть органы йәки урындағы үҙидара органы ведомство-ара эш итеү каналдары буйынса кәрәкле мәғлүмәтте үҙе һорап алырға тейеш", - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Уның һүҙҙәренсә, медик-социаль экспертиза дәүләт учреждениеларынан документтарҙы шәхсән тапшырыу тураһында талап федераль законда билдәләнгәйне, ләкин 2020 йылдың 1 июленән был норма ғәмәлдән сығарылды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УКАЗҒА ҮҘГӘРЕШТӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе.**

Документтың яңы редакцияһына ярашлы, 65 йәштән өлкәндәр, шулай уҡ хроник сирҙәре булғандар өсөн үҙизоляция режимы 28 ғинуарға тиклем һаҡлана. Указ республика һәм Рәсәй кимәлендәге рәсми спорт ярыштарын уҙғарырға рөхсәт бирә, ләкин был сараларҙы асыҡ һауала - тамашасыларҙың 50 проценты, ябыҡ бинала иһә 30 проценты ҡарарға мөмкин. Бынан тыш, 18 ғинуарҙан Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау, Мәғариф һәм фән министрлыҡтары ҡарамағындағы учреждениелар ғәҙәти эш тәртибенә күсә, ләкин санитар-эпидемиолог иҡ ҡағиҙәләргә үтәү мотлаҡ. Һәм тағы. Башҡортостанда ковидҡа ҡаршы паспорт индерелә, тип хәбәр итте республика Башлығы. Билдәләнеүенсә, проектты февраль башында башлап ебәреү планлаштырыла. Проект операторы функцияһын Башҡортостандың Һанлы үҫеш министрлығы башҡара - паспорт һанлы, QR-код рәүешендә була. Уны алыу өсөн дәүләт хеҙмәттәре порталында шәхси кабинетты теркәргә кәрәк. Проекттың асылы шунда: ковидтан прививка яһатҡан кеше өҫтөнлөктәргә, льготаларға, ташламаларға эйә була һәм эпидемияға ҡаршы саралар сиктәрендә индерелгән сикләүҙән азат ителә. Прививка эшләткән кеше тамашасыларҙың 30 процентлы квотаһынан тыш спектаклдәргә, концерттарға, киноға бара ала. Спорт йыйындарында тулы трибунала ултырырға хоҡуҡлы. Ҡайһы бер магазиндар проекттың партнерҙары була һәм QR-код буйынса ҡатнашыусыға ташлама яһай. Вакцина алған кешеләр фитнес-үҙәктәргә, шифаханаларға, туристик урындарға иркенләп йөрөргә мөмкин. Уҡытыусыларға өҫтәмә аҡса һәм ял көндәре бирелә. 65 йәштән өлкәндәргә ҡарата эпидемияға ҡаршы барлыҡ сикләүҙәр бөтөрөлә. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, граждандарҙың шәхси мәғлүмәттәре хәүефһеҙлегенә махсус иғтибар бүленә. "Шулай итеп, был проектта иң мөһиме - вакцинаны популярлаштырыу, сөнки ошо сараларҙан башҡа коллектив иммунитетҡа ирешә, эпидемияны еңә алмайбыҙ", - тине республика Башлығы.

# КҮРГӘҘМӘ КҮСЕП ЙӨРӨЙ

**Өфө ҡалаһының "Каруанһарай" сауҙа үҙәгендә Башҡортостан Республикаһының Архив эштәре буйынса идаралығы һәм Башҡортостан Республикаһының Милли архивы тарафынан әҙерләнгән "Башҡортостанда халыҡ иҫәбен алыу тарихынан" күсмә күргәҙмәһе эшләне.**

Үҙенсәлекле проект күптәрҙе ҡыҙыҡһындырҙы. Сөнки уҙған йылдарҙағы иҫәп алыу тураһындағы архив документтары ата-бабаларыбыҙҙың тормошон һәм эшмәкәрлеген тулыраҡ күҙалларға ярҙам итә. Улар нигеҙендә теләге булған һәр кеше тыуған төйәгенең тарихын өйрәнә һәм шәжәрә ағасын төҙөй ала. Халыҡ иҫәбен алыу - ил һәм республика йылъяҙмаһының тарихи үҫешен күҙаллау ысулы. Уның һөҙөмтәләре беҙгә генә түгел, беҙҙән һуң йәшәйәсәк быуындарға ла мөһим. Архивсыларҙың төп бурысы - киләсәк өсөн уҙған быуаттың документаль мираҫын һаҡлау. Был проект тыуған яҡ тарихы һәм шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһынғандар араһында архив документтарын популярлаштырыуға йүнәлтелгән.

16 декабрҙә күсмә күргәҙмә марафонын "Башҡортостан" лайфстайл үҙәге ҡабул иткәйне. Былтырғы йылдың һуңғы көнөндә тарихи күргәҙмә "Мега" сауҙа-күңел асыу үҙәгендә ойошторолдо. Ғинуарҙың икенсе яртыһында марафон "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәгенә барасаҡ. Артабан күсмә күргәҙмә маршруты Өфө ҡалаһының юғары уҡыу йорттары: Башҡорт дәүләт университеты (1 февралдән 14-нә тиклем), Өфө дәүләт авиация техник университеты (15-28 февраль) һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты (1-14 март) буйлап үтә. Тарих һөйөүселәр өсөн бик тә ҡыҙыҡлы марафон 15 мартта Өфө дәүләт технология һәм дизайн колледжында тамамлана.

# БОРСОЛОУ БЕЛДЕРЕЛДЕ



**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы һәм Башҡарма комитеты Әхмәтзәки Вәлидиҙең Санкт-Петербург дәүләт университеты биләмәһендә урынлаштырылған бюсын алып ташлауҙы талап итеү тураһында мәғлүмәткә бәйле борсолоу белдерҙе һәм Санкт-Петербург прокуратураһына һәм университет ректорына һорау менән хат ебәрҙе.**

Хатта билдәләнеүенсә, Санкт-Петербург дәүләт университеты биләмәһендә урынлашҡан бюст Әхмәтзәки Вәлидиҙең фәнни ҡаҙаныштарын таныу йөҙөнән ҡуйылған һәм уны донъяның фәнни йәмғәтселегендә абруй ҡаҙанған ғалимтөркиәтсе булараҡ һынландыра. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бюст 2008 йылдың йәйендә Санкт-Петербург дәүләт университетының филология факультеты биләмәһендә урынлаштырылғайны. Авторы - Өфө скульпторы Владимир Дворник. Бюст менән бер үк ваҡытта Санкт-Петербург университетында Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Төрки тикшеренеүҙәр үҙәге асылғайны. "47news" баҫмаһы хәбәр итеүенсә, бер беренсе курс студентының әсәһе Генераль прокуратураға бюст буйынса ялыу хаты яҙған. Ошо көндәрҙә Санкт-Петербург дәүләт университетына ҡала прокуратураһынан Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың бюсы буйынса етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү тураһында күрһәтмә ебәрелгән. Санкт-Петербург дәүләт университетында прокуратураның шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлиди һәйкәлен һүтергә тигән талабына ҡаршы килмәскә һәм бюсты белем биреү учреждениеһы биләмәһенән алырға хәл иткәндәр.

# ТҮЛӘП ЙӨРӨ

**Башҡортостанда түләүле юлдарҙан йөрөү тураһында закон ҡабул ителә, тип белдерҙеләр республика Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтендә. Яҙғы сессияның беренсе ултырышында "Башҡортостан Республикаһында автомобиль юлдары һәм юл эшмәкәрлеге тураһында" законға тейешле үҙгәрештәр индерелә.**

Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, яңы закон түләүле юлдар инфраструктураһын үҫтереү өсөн әҙерләнгән. "Былтыр федераль кимәлдә ошондай норма индерелгәйне, хәҙер беҙ республика ҡануниәтенә тейешле үҙгәрештәр индерәбеҙ", - тине Толкачев. Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, альтернатив түләүле юлдар системаһын үҫтереү юл инфраструктураһын камиллаштырырға һәм юлдарҙа аварияларҙы кәметергә ярҙам итергә тейеш. "Башҡортостанда түләүле автомобиль юлдары булмаһа ла, күп кенә автомобиль хужалары илебеҙҙең башҡа төбәктәрендә уларҙың өҫтөнлөктәрен баһаланы, - тине Ҡоролтай рәйесе. - Күпмелер аҡса түләп, водитель үҙенә кәрәкле урынға тиҙерәк һәм уңайлыҡ менән барып етергә мөмкин". Республикала 2024 йылға тәүге түләүле юл төҙөлөргә тейеш. Ул автомобиль юлы тоннеле һәм Өфө йылғаһы аша күпер төҙөлөшөн тамамлауҙы күҙ уңында тотҡан "Көнсығыш сығыу юлы" проектының бер өлөшө була.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Был аҙнала Башҡортостанда һауа торошон һалҡын антициклон билдәләне. "Гисметео" порталының яҡынса мәғлүмәттәре буйынса, 20 градус һыуыҡтан һуң республикала ҡапыл йылытасаҡ. Синоптиктар белдереүенсә, йәкшәмбе, 24 ғинуарҙа, көндөҙ 0 градус була, ә төндә - 12 градустан түбәнәймәй. Киләһе аҙнала Өфөлә йылы булыуы көтөлә, бер аҙ ҡар һәм ямғыр яуыуы ихтимал.

✓Өфөнән Махачкалаға аҙнаһына бер тапҡыр рейс асылды. Хәҙер Башҡортостанда йәшәүселәр Каспий диңгеҙендә ял итә ала. Туристарҙың һоҡланғыс Кавказ тауҙарын, Дербенттағы Нарын-ҡала ҡәлғәһен, етмеш метрлыҡ Тобот шарлауығын, илдәге берҙән-бер лиана урманын, ҡаялар араһына йәшеренгән ауылдарҙы һәм башҡа бик күп хозур урындарҙы күреү мөмкинлеге бар.

✓Башҡортостанда сауҙа селтәрҙәре изоляцияла ултырған пенсионерҙар өсөн "бәхетле сәғәттәр" ваҡытын үҙгәртте. Республика Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 65 йәштән өлкәндәр өсөн "Магнит", "Лента", "Пятерочка", "Ашан", "Байрам", "Йәрминкә" магазиндарында 10 процентка тиклем ташламалар ҡаралған.

✓Февраль башында Башҡортостанда грипп эпидемияһының башланыуы көтөлә, тип иҫкәртә Роспотребнадзорҙың республика идаралығы. Ведомство етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина хәбәр итеүенсә, әлеге ваҡытта Башҡортостанда киҫкен респиратор ауырыуҙарының артыуы билдәләнә. Әлегә грипп вирусы асыҡланмаған. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы фаразлауынса, грипптың A һәм B вирустары көтөлә.

✓Ике тапҡыр ADCC Submission Wrestling World Championship еңеүсеһе һәм джиу-джитсу буйынса донъя чемпионы, хәҙер инде үҙ мәктәбенең баш тренеры Джефф Монсон Өфөлә джиу-джитсу һәм грэпплинг мәктәбен асты. "Һәр кем һәләтле, һәр кем джиу-джитсуға өйрәнергә мөмкин, шуға мин үҙемдең белемем менән уртаҡлашыу өсөн Башҡортостанға килдем, - ти Монсон. Республикала халыҡ-ара кимәлдә сығыш яһаған профессиональ команда ойошторорға теләйем. Икенсе маҡсатым - һәр ауылда, һәр ҡалала джиу-джитсу юғары кимәлдә булһын өсөн шарттар булдырыу". Баш ҡала джиу-джитсу буйынса донъя чемпионы мәктәбе "Нефтсе" спорт комплексында эшләй, ҡайһы бер дәрестәр Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә үткәрелә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЭШСЕ ҺӨНӘРЕ ЛӘ...

## ҡыҙыҡтыра



**Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә төрлө эшсе һөнәр оҫталарының донъя кимәлендәге "Йәш профессионалдар" (WorldSkills) хәрәкәте киң йәйелдерелә бара. Быйыл "Йәш профессионалдар" Бөтә Рәсәй чемпионаты Өфөлә уҙғарыласаҡ һәм уға әҙерлек сиктәрендә Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында бизнес-ширҡәттәр менән социаль хеҙмәттәшлек мәсьәләләре буйынса түңәрәк ҡор ойошторолдо.**

Һөйләшеү барышында студенттарҙы төбәк чемпионатына әҙерләү һәм Милли чемпионатта ҡатнашыу мәсьәләләре күтәрелде. Шулай уҡ йәштәрҙе эшсе һөнәрҙәренә ылыҡтырыуға йүнәлтелгән уртаҡ саралар уҙғарыу, профориентацион эште ойоштороу буйынса ла фекерҙәр тыңланды. Унда Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Инесса Косолапова, БР Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Элина Ғатауллина, БР Сауҙа министрлығы бүлек начальнигы Эдуард Михайлов, БР Кулинарҙар, рестораторҙар һәм отелдәрҙәр ассоциацияһы рәйесе Наталья Чибрикина, "Ашан-Өфө" гипермаркетының хеҙмәткәрҙәр бүлеге етәксеһе Ольга Хәбибуллина һәм туҡланыу, туризм йүнәлешендә һөҙөмтәле эшләгән башҡа ойошмалар етәкселәре ҡатнашты.

- "Йәш профессионалдар" чемпионаты илдә үткәрелә башлағандан алып был юҫыҡта әүҙем эшләйбеҙ һәм беҙҙең студенттар йыл да төрлө кимәлдәге ярыштарҙа алдынғылыкты бирмәй. Беҙ уларҙы өс йүнәлеш - туризм, ресторан сервисы, ҡунаҡхана етәкселеге буйынса әҙерләйбеҙ. Быйыл тап беҙҙекеләр республика кимәлендәге һөнәри ярышта беренсе урын яуланы һәм бына Өфөлә ошо тармаҡтарҙа алдынғы предприятиеларҙы кәңәшмәгә саҡырып, фекер алыштыҡ, хеҙмәттәшлек итеү, командаларҙы әйрәтергә һүҙ ҡуйыштыҡ, - тине сараны ойоштороусы Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры Ришат Сабитов. - Ресторан сервисы буйынса 3 проблемалы мәсьәләлә "Высота" һәм "Премьер" ресторандары, Йәмәғәт туҡланыуы буйынса уҡыу-курс комбинаты ярҙам итәсәк. Студенттарҙы тур һайлау эшенә "Пегас-туристик" өйрәтә, Баштурсоюз яңы туристик продукт, ә республиканың Туризм буйынса дәүләт комитеты ҡануниәттәге яңылыҡтар менән таныштырып торасаҡ. CrownePlazaUfa - CongressHotel ҡунаҡхана етәкселеге буйынса студенттарға һөнәри белем бирергә ярҙамлашасаҡ. Тағы ла ошо ярышҡа әҙерлек барышында студенттарҙы Ҡазан йәки Мәскәүгә тәжрибә тупларға йүнәлтергә лә ниәт бар...

Ришат Хәжиғәли улы билдәләүенсә, "Йәш профессионалдар" чемпионатының һөнәри белем усаҡтары өсөн дә, уларҙа уҡыған йәштәрҙең киләсәге өсөн дә әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ул студенттарға яңы мөмкинлектәр тыуҙыра һәм йәштәр тырышып белем ала, ярыш сәме уларҙы һайлаған һөнәре буйынса камиллашырға дәртләндерә. Чемпионат кимәл ҡуя, шуға тап килеү өсөн тырышлыҡ һалырға әйҙәй. Унан һуң, чемпионаттарҙа ҡатнашып юғары һөҙөмтәгә өлгәшеүсегә "Компетенциялар паспорты" бирелә, тимәк, уның оҫталығы донъя кимәлендәге талаптарға яуап биреүе күрһәтелә. Был инде йәш кешегә эшкә урынлашҡанда күп мөмкинлектәр аса.

Әйткәндәй, Өфөлә уҙасаҡ "Йәш профессионалдар" (WorldSkills Russia) Бөтә Рәсәй чемпионатына әҙерлек мәсьәләләре буйынса кәңәшмә тамамланғас, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжының республика кимәлендәге бәйгелә еңеү яулаған студенттарын тәбриклəү тантанаһы ла ойошторолдо. Йәштәр иҫтәлекле грамоталар һәм аҡсалата премиялар алды, ә уларҙы әҙерләгән уҡытыусылары Динара Насибуллина, Ксения Коваленко һәм Гөлназ Килмөхәмәтова хеҙмәттәре емеш биреүен күреп һөйөндө.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЭШҺЕҘЛЕК АРТА...

## әммә эш бар



**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала хакимиәте башлығы вазифаһына рәсми процедуралар аша үтеп тәғәйенләнгән Сергей Греков етәкселегендә сираттағы видеоконференция форматындағы оператив кәңәшмә үтте.**

Зәки Вәлиди урамы менән Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урындағы юл үткәргестәге реконструкция барышы саралағы төп темаларҙың береһе булып торҙо. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы урынбаҫары Радмил Мөслимов үҙ сығышында эш торошо буйынса мәғлүмәт еткерҙе. 16 ғинуарҙа Салауат Юлаев проспекты өҫтөнән үткән күперҙә тест рәүешендә транспорт хәрәкәте туліһынса ябыла һәм транспорт ағымы ике яҡҡа ла ваҡытлыса булдырылған юлдар буйынса светофорҙар эшмәкәрлеге аша көйләнә. Шулай уҡ эргә-тирәләге урамдарҙа ла хәрәкәт светофорҙарҙың фазаларын көйләү һөҙөмтәһендә рәткә һалына, йәғни үҙәкҡә сығыу өсөн Яр буйы урамына һәм Сочи урамына йүнәлеш ҡуйыла. Әммә был йүнәлештең хатта пик сәғәттәрендә лә буш булыуы автомобилселәр тарафынан бик файҙаланылмай тиғән һығымта яһарға мәжбүр итә. Зәки Вәлиди урамынан Воровский урамына боролған урында ла, "Мәктәп" тукталышында ла "Һыҙаттар буйынса хәрәкәт" өстәмә юл билдәләре ҡуйыла, ял көндәрендә юл-транспорт торошо тыныс була. 17 ғинуарҙа күперҙең бығa тиклем ябылған өлөшөндә әҙерлек эштәре тамамлана, 18-19 ғинуарҙа күпер араларындағы балкаларҙы һүтеү эштәре башлана. Әйткәндәй, бер балканың ауырлығы 42-50 тонна һәм уның дәүмәле лә бәләкәй түгел. Шуға күрә, юлдарҙағы хәрәкәтҡә ҡамасауламау һәм хәүеф тыуҙырмау маҡсатында улар төҙөлөш майҙанынан төнөн генә сығарыла. Юл үткәргес 20 балканан тора, 19 ғинуарға ҡарата уларҙың һигеҙе һүтелгән. Балкаларҙы һүтеү буйынса эштәрҙең ай һуңында тамамланыуы күҙаллана. Ғөмүмән, былдағы юл хәрәкәте даими иғтибар үҙәгендә тотола. Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡатнашлығында үткән кәсмә оператив кәңәшмәлә реконструкцияны юл хәрәкәтен тулыһынса ябып башҡарыу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Был осраҡта эштәрҙең 1 сентябргә тамамланыуы көтөлә.

Үтеп барған аҙнаның икенсе төп темаһы - йылылыҡ өсөн түләүҙәр буйынса халыҡ менән осрашыуҙар йомғаҡтары. Мәҫәлән, Ленин районында был хәлде анализлағандан һуң эш төркөмө булдырылған, 138 күп фатирлы йорттоң совет ағзалары һәм йорт буйынса яуаплы вәкилдәр менән осрашыуҙар үткәрелгән, йылылыҡ биреү ҡоралмалары тикшерелгән, уларҙа техник боҙоҡлоҡтар табылмаһа ла, йорттарҙың саманан артыҡ йылытылыуы асыҡланған. Киров районындағы тикшереү ваҡытында иһә резерв циркуляр насостарҙың боҙолоуы буйынса 15 осраҡ асыҡланған. Калинин районында бындай тикшереү эштәре 1 февралгә тиклем алып барыласаҡ һәм ай һайын районды торлаҡ хужалығы идаралығы йорттар буйынса яуаплы вәкилдәргә иҫәп алыуҙың дөйөм йорт буйынса күрһәткесе мәғлүмәттәре менән таныштырып торасаҡ. Совет, Дим, Октябрь, Орджоникидзе райондарында ла халыҡ менән осрашыуҙар үткән, халыҡты борсоған һорауҙарға яуаптар бирелгән, йылылыҡ өсөн түләүҙә ҡайһы бер етешһеҙлектәр булыуы асыҡланған.

Өсөнсө төп тема - баш ҡалалағы эшһеҙлек. Был мәсьәлә бигерәк тә эпидемиологик хәл-торош һөҙөмтәһендә ҡатмарлаша. Ҡаланың Халыҡтың мәшғүллек үҙәге директоры Ридан Әхиәмов билдәләүенсә, бөгөн үҙәктә 36 848 кеше иҫәптә тора, йыл башына 21141 вакансия булған. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Хөкүмәте эшһеҙҙәрҙе теркәүҙең һәм уларға социаль пособие түләүҙең ваҡытлыса тәртибен, мәшғүллек үҙәге хеҙмәттәренең дистанцион эшләүен 31 мартҡа тиклем оҙайтты. Быйыл Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса максималь түләү - 13949, минималь күләм 1425 һум булып ҡала, әммә балиғ булмаған балалар өсөн өҫтәмә түләү ҡаралмаған.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҢЫ ТЫЙЫУҘАР

**2021 йылда Рәсәйҙә тәмәке тартыусылар өсөн яңы талаптар индерелә, тип хәбәр итә Прайм агентлығы. Мәҫәлән, 1 ғинуарҙан медицина учреждениеларында, сауҙа нөктәләрендә, база һәм келәт биналарында тартыу тыйыла. Был ҡағыҙа Хөкүмәттең 2020 йылдың 25 сентябрендәге "Янғынға ҡаршы режим ҡағиҙәләрен раҫлау тураһында" ҡарары менән индерелә.**

Тәмәкеселәр өсөн майҙан махсус "Тәмәке тартыу урыны" тип яҙылған таблица менән билдәләнергә тейеш. Быға тиклемге кеүек, келәт, база, икмәк ҡабул итеү пункттары биләмәләрендә, баҫыуҙа, бесәнлектә, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, транспорт, сауҙа, тиҙ яна торған шыйыҡса, газ табыу, етештереү, һаҡлау, шартлатҡыс матдәләр етештереү объекттарында, шартлау ҡурҡынысы булған һәм янғын хәүефле участкаларҙа тартырға ярамай. Күрһәтелгән ойошмалар етәкселәре үҙ объекттарында янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре менән тартыуҙы иҫкәрткән билдәләр элергә тейеш.

Рәсәйҙә йәмәғәт урындарында тартыу 2013 йылда тыйылды. Ул белем биреү, мәҙәни, спорт һәм медицина учреждениеларына ҡарата ҡабул ителгәйне. Бынан тыш, вокзалға, аэропортҡа, диңгеҙ һәм йылға портына инген урында (15 метрҙан дә кәм булмаған), дәүләт органдарында, балалар майҙансыҡтарында, пляжда, социаль хеҙмәт һәм бина эсендәге эш урындарында тартырға ярамай.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үпкә шешеүе

❖ Киптереп ваҡланған әрем үләненең бер семтемен ауыҙға һалып, бер аҙ төкөрөк менән сылатырға һәм йоторға, артынан әҙ генә һыу эсергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда шулай дауаланырға.

### Теш ҡаҙнаһы

❖ Теш ҡаҙнаһы сирҙәренән һәр ваҡыт зур булмаған сей картуф киҫеген сәйнәп йөрөү кәңәш ителә. Халыҡ борондан ауыҙ ҡыуышлығы сирҙәрен һәм зәнгенән сей картуф ярҙамында дауаланған.

### Эс ҡатыу

❖ Шыршы тубырсығын кистән ҡайнар һыулы стаканға һалып ҡуйырға. Иртәнсәк тубырсыкты алып ташларға һәм ас ҡарынға төнәтмәнең яртыһын эсергә, ҡалған яртыһын иртәнге көндөң иртәнсәгенә ҡалдырырға. 30 көнгә 15 тубырсыҡ кәрәк була, шунан 10 көнгә дауаланыуҙы туктатып торорға һәм курсты тағы 2 тапҡыр ҡабатларға.

### Тын ҡыҫылыу

❖ Тын ҡыҫылғанда көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан һаҙанаҡ һәм кесерткән төнәтмәһе эсергә кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 25 грамм ваҡланған һаҙанаҡ үләне һәм 10 грамм кесерткән япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә.

### Деменция

❖ Ҡартлыҡҡа бәйле хәтер насарайғанда милләш ҡайырының ҡуйы ҡайнатмаһын эсәләр. Әҙерләү өсөн 200 грамм ҡайырыға 500 мл ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 2 сәғәт ҡайнатырға. Ашарҙан алда 20-30 мл эсергә.

### Үҙәк көйгәндә

❖ 6-10 календула сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға, һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көн дауамында һыу урынына эсеп бөтөрөргә. Икенсе көнөнә яңынан әҙерләргә. Шул рәүешле ике аҙна тирәһе дауаланыу ҙа етә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Баймаҡ районы вәкиле Баҡый Вәлиев рейдтан дивизия байрағын алып сығып, был хәрби берләшмәне тарҡатыуҙан һаҡлап ҡала. Ул немец самолеты торбаһынан ҡурай эшләп, уны үҙе менән һуғыш дауамында алып йөрөй.*



## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Башҡорттарҙа туҡыусылыҡты дөйөм сағылдырып, Н.В. Бикбулатов уның хужалыҡта һәм территориялағы йорт етештереүселеге комплексында тотҡан урыны тигеҙ булмауын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уның мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостандың ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш районлары ҡулдан туҡыусылыҡ төрлө яҡлап үҫеш алған төбәк булған. XX быуаттың 60-сы йылдарында баҫылып сыҡҡан башҡорт милли кейемен ҡылыҡһырлаған очеркта күтәреп һуғылған киндерҙән (браный холст) тегелгән кейем таралған урындар картала күрһәтелгән. Ул үҙ эсенә төньяҡ һәм үҙәк райондарҙы алған, көньяҡ-көнбайышта Дим йылғаһы бассейны, Урал аръяғының көнсығышы ла ингән. Көньяҡтараҡ киженән дә (ҡулдан һуғылған биҙәкле туҡыманы төньяҡ-көнбайыш диалектында, урта урал һәм әй һөйләштәрендә шулай атағандар, ҡариҙел һөйләшендә "кижем" тигәндәр), ҡулдан һуғылған орнаментлы туҡыманан да тегелгән кейемдәр булмаған. Ялан яғында тирмәләрен һуғылған сағыу шаршауҙар, таҫтамалдар, ашъяулыҡтар менән бер ҡасан да биҙәмәгәндәр. Урыны-урыны менән, күпселек Урал буйы һәм Урал аръяғының ҡатнаш райондарында, халыҡ ултыраҡ тормошҡа күскән саҡта был әйберҙәр ауылдарҙа килеп сыҡҡылаған, әммә көнкүрештә массовый төҫ алып китмәгән.

Башҡортостандың көньяғындағы ауыл өйҙәренең эске биҙәлеше үҙенә бер төрлө: ул ҡайыу, аппликация менән биҙәлгән әйберҙәр менән тулы булған. Өфөнән төньяҡта һәм Кама буйында һирәк таралған балаҫ һуғыу был яҡтарҙа киреһенсә бик яҡшы үҫешкән. XIX быуаттың икенсе яртыһында бөтә көньяҡ территорияға күсмә тормош ҡалдыҡтары күп һаҡланған игенселек-малсылыҡ төбәге тигән ҡылыҡһырлама бирелә.

Хәҙер күпмелер ваҡыт үтеп, бөтә тупланған материалды өйрәнгәндән һуң башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә тарихи барлыҡҡа килгән ике туҡыусылыҡ өлкәһе булыуын әйтергә мөмкин - төньяҡ һәм көньяҡ йәки игенселек һәм малсылыҡ. Һуңғы билдәләнеш бер ни тиклем шартлы, сөнки игенселек һәм малсылыҡ традициялары төньяҡта ла, көньяҡта ла берләшеүе күренгән. Шулай ҙа туҡыусылыҡтың йөкмәтке ҡылыҡһырламаһы буйынса (йолалар барлыҡҡа килгән ваҡыт, этник сығанаҡтар, һуңғы билдәләр) улар айырыла. Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә һәм Урал аръяғының көнсығышында (Силәбе, Ҡурған) һуңғы осор күскенсе-малсылар донъяһы менән бәйләнеш комплекслы күҙәтелә, оҡшашлыҡтар туранан-тура.

Башҡорттарҙа туҡыусылыҡ өлкәләренең билдәләнеше күпселек осраҡта XIX быуат һәм XX быуат башы мәғлүмәттәренә нигеҙләнгән. Билдәле, тәүгерәк осорҙа көньяҡ ареалға тотошлай элекке Нуғай даруғаһы территорияһы һәм Иҫәт провинцияһының Урал аръяғы өлөшө ҡараған, унда беренсе академик экспедициялар ваҡытында (XVIII б.) хужалыҡ эштәренең нигеҙен малсылыҡ тәшкил иткән һәм бөтә ерҙә тиерлек йәйләүҙәргә күсеү һаҡланған. Хужалыҡ базаһы яраҡлы йорт кәсептәрен үҫтереүгә сығанаҡ булған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Яңы йыл алдынан Башҡортостан халҡы үҙенсәлекле бүләккә эйә булды. Быны ысын мәғәнәһендә халыҡтың халыҡҡа бүләге тип ҡабул итергә мөмкин, сөнки ул 2019 йылда башланып, дөйөм халыҡ проектына әүерелде. Эйе, һүҙ "Шайморатовсылар" проекты хаҡында. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ике йыл дауам иткән проектты йомғаҡлап, "Шайморатовсылар - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" биографик белешмәһенең электрон версияһының исем туйы үтте.**

# АТ УЙНАТЫП АЛДАН БАРА...

Социаль селтәрҙәрҙе күҙәтеп барыусылар иһә көн һайын махсус сәхифәлә яугирҙарҙың исемлеге баҫылып барыуына иғтибар иткәндер, моғайын. Ысынлап та, Башҡорт кавалерия дивизияһы 78 Советтар Союзы Геройын, Дан орденының 5 тулы кавалерын биргән, 3860 һалдаты орден һәм миҙалдар менән наградланған берҙәнбер кавалерия берләшмәһе булһа ла, уның яугирҙарының тулы исемлеге әлегәсә булмай һәм был етешһеҙлекте бөтөрөү, бушлыҡты тултырыу маҡсатынан киң ҡоласлы эш башлана ла инде.



Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова "Шайморатовсылар" проектының Ҡоролтай иғлан иткән Башҡорт тарихы йылына һуҡмаҡ булыуын билдәләп, бөгөн Шайморатов исеме Башҡортостан халҡы өсөн ялтырауыҡлы атама булмауын, уның тормошобоҙҙа көн һайын ҡабатланыуын, легендар милләттәшебеҙҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса байтаҡ эштәр эшләнеүен, тиҙҙән уға һәйкәл ҡуйыласағын билдәләне. Ғөмүмән, Шайморатовтың һәм шайморатовсыларҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса эш комплекслы, дәүләт власы органдары, йәмәғәт ойошмалары, ғалим-эксперттар, халыҡ менән берлектә алып барылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Әһәмиәтле белешмәнең исем туйы менән БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев тәбрикләне һәм быны Бөтә Рәсәй кимәлендә мөһим ваҡиға тип баһаланы, шулай уҡ генерал Шайморатовҡа һәм уның дивизияһы яугирҙарына арнап, мәҙәниәт учреждениеларында ойошторолған саралар менән таныштырҙы. Ил өсөн башын һалған яҡташтарыбыҙҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса музейҙар: БР Милли музейы, БР Хәрби дан музейы, уның Дим районындағы филиалы - 112-се кавалерия дивизияһы музейы һәм башҡа филиалдарҙың, музейҙарҙың был йәһәттән әүҙем эш алып барыуын билдәләне.

БДБҠ Башҡарма комитетының Тарих һәм башҡорт халҡын үҫтереү буйынса комиссия рәйесе Азат Ярмуллин проекттың 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерлек сиктәрендә башланыуын һәм легендар кавдивизия яугирҙарының иҫтәлеген мәңгеләштереүгә йүнәлтелеүен билдәләне. Был проектта республика райондары ҡоролтайҙары, граждандар әүҙем ҡатнаша һәм яҡындары, туғандары тураһында анкеталар тултырып ебәрә, ҡомартҡылары, матбуғатта донъя күргән мәҡәләләр менән бүлешә. Шулай уҡ республиканың хәрби комиссариаты, Архив эштәре буйынса идаралыҡ, Милли архив та ярҙам ҡулы һуҙа. БДБҠ ағзалары махсус рәүештә Оборона министрлығы архивына барып, унда тупланған мәғлүмәттәрҙең күсермәһен алып ҡайта. Улар барыһы бергә тупланып, Башҡорт энциклопедияһы ғилми-нәшриәт комплексына мәғлүмәттәрҙе аныҡлауға һәм белешмә әҙерләп сығарыуға тапшырыла, унда Халыҡ хәтере (Память народа), Халыҡ ҡаһарманлығы (Подвиг народа) кеүек электрон порталдарҙағы мәғлүмәттәр менән сағыштырылып тикшерелә.

"Башҡорт энциклопедияһы" нәшриәтенең фәнни мөхәррире Клара Әғлиуллина белешмәнең электрон варианты менән таныштырып, февралдә уның баҫма версияһы ла сығасағын белдерҙе. 112bkd.ru сайтында урынлашҡан белешмәлә барлығы 2700 кешенең исем-шәрифе урын алған. Әгәр "Бәйләнештә" һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы сайтында баҫылған фамилияларҙың дөйөм һаны 3800 булһа, энциклопедия эксперттары тикшереүенән һуң улар кәмегән, сөнки ҡайһы бер фамилиялар ҡабатланған, исемлеккә эләккән ҡайһы бер кешеләрҙең бөтөнләй 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына мөнәсәбәте булмауы асыҡланған.

Сайт буйлап экскурсия яһағанда, унда бер нисә бүлек бар, дивизияның барлыҡҡа килеүенән алып уның хәрби яу юлы менән танышырға мөмкин. Личный составта алфавит буйынса тулы исемлек бирелә. Библиографияла шайморатовсыларға арналған рус һәм башҡорт телендә сыҡҡан китаптар, баҫма мәғлүмәт тупланһа, фильмография-ла - фильмдар урын алған. Шулай уҡ яугирҙарҙың иҫтәлектәре урынлаштырылған. Хәтер бүлегендә иһә ҡаһармандарҙың, яҡташтарҙың исемдәрен эҙләү һәм мәңгеләштереү буйынса алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһе күренеп тора.

Бөгөнгө цифрлаштырыу заманында электрон варианттың өҫтөнлөгө шунда - уны даими рәүештә тулыландырып барырға мөмкин. Клара Әғлиуллина белдереүенсә, әлеге ваҡытта китаптар ҡыҫҡа аннотация менән генә бирелһә, киләсәктә З. Вәлиди исемендәге Милли китапхана менән берлектә уларҙың цифрлаштырылған варианттарын урынлаштырырға йәки уларға һылтанмалар бирергә мөмкин. Был шулай уҡ фотоларға, башҡа мәғлүмәткә лә ҡағыла. Юҡҡа ғына онлайн-презентацияла ҡатнашыусылар быңдай белешмәнең донъя күреүен оло һәм әһәмиәтле ваҡиға тип баһаламаны - ысынлап та ул киң аудитория өсөн файҙалы ҡулланма буласаҡ.

Шулай уҡ Клара Ишбулды ҡыҙы тарих фәндәре докторы Нәзир Ҡолбахтиндың Ҡырмыҫҡалы районының Шайморатов ауылында элекке земство мәктәбе бинаһы булыуы һәм унда Шайморатовтың йорт-музейын булдырыу идеяһын еткерҙе. Әгәр район хакимиәте шундай инициатива менән сыҡһа, был мәҙәни мираҫ объекты булған биналарҙы бер ыңғайҙан ҡотҡарыу ысулы ла буласаҡ.

Сибай ҡалаһының тарих-крайҙы өйрәнеү музейы директоры Альбина Ярмуллина Баймаҡ районы һәм Сибай ҡалаһы буйынса тупланған мәғлүмәт менән таныштырҙы. Уларҙа 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән яугирҙарҙың шәхси әйберҙәре-экспонаттары ла һаҡлана. Тап Баймаҡ районы вәкиле Баҡый Вәлиев рейдтан дивизия байрағын алып сығып, был хәрби берләшмәне тарҡатыуҙан һаҡлап ҡала, сөнки хәрби берләшмә һуғыш йәки башҡа ваҡытта хәрби байрағын юғалта ҡалһа, тарҡатылыуға дусар була. Ул үҙе ҡурайсы була һәм Күсимовтың бойороғо буйынса бәреп төшөрөлгән немец самолеты торбаһынан ҡурай эшләп, уны үҙе менән һуғыш дауамында алып йөрөй. Сибай музейында был ҡурай ҙа, уның ҡыҙылармеец кенәгәһе лә һаҡлана. Хатта музейҙа белешмәгә ингән, әммә фотолары булмаған кешеләрҙең фотолары ла, башҡа материалдар ҙа бар һәм Альбина Зөфәр ҡыҙы белешмәгә инмәгән барлыҡ материалдар менән бүлешергә әҙер булыуҙарын белдерҙе.

Бөгөн тормошобоҙҙо глобаль энциклопедия - Википедиянан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Әммә Википедияның төп талаптарының береһе - мәҡәләләрҙең абруйлы сығанаҡтарға нигеҙләнеүе. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарының исемлеге баҫыла башлау менән Башҡорт Википедияһы уны үҙенең киңлектәренә күсереүгә тотоноп, былтыр 13 ноябрҙә - 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолған көндә проект итеп төп киңлеккә сығарҙы. Хәҙер инде Башҡорт энциклопедияһында эшләнгән белешмә ошо исемлек буйынса яугирҙар тураһында википедия талаптарына ярашлы мәҡәләләр яҙыу өсөн төп сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Был хаҡта Башҡорт Википедияһы ирекмәне Зәйтүнә Ниғәмәтйәнова һөйләне һәм йәйгеһен "112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары" конкурсы үткәреләсәге тураһында белдерҙе, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаларынан урындағы ҡоролтайҙар аша был конкурсҡа һәр райондан ҡатнашыусыларҙы йәлеп итеүҙә ярҙам һораны. Шулай уҡ ул ҡайһы бер яугирҙар буйынса мәғлүмәттәр наҡыҫ булыуы сәбәпле, конкурстың мәҡәлә яҙыу менән бер рәттән, викимәғлүмәт элементтарын тултырыу буйынса уҙғарыласағы тураһында һөйләне. Башҡорт Википедияһында ирекмән булырға теләүселәр өсөн һәр шаршамбы Рөстәм Нурыевтың Онлайн вики-мәктәбендә дәрестәр алып барылыуы һәм алдан яҙылып, унда һәр кем уҡып сыға алыуы хаҡында ла мәғлүмәт бирҙе.

...Һуңғы һалдат ер ҡуйынына һалынғас ҡына һуғыш туҡтай, тигән бөйөк полководец А. Суворов. Тимәк, әле һуғыш дауам итә. Тик был юлы ил-йортто һаҡлап түгел, ә ил-йорто өсөн ғүмерен ҡорбан иткән, инде хәҙер йәштәре беҙҙән йәшерәк булып ҡалған ата-олатайҙарҙың исемдәрен мәңгеләштереп өлгөрөү өсөн ваҡыт менән алыш ул. Ул алышта шайморатовсылар ат уйнатып иң алдан бара...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *Ул бер үк төрлә тиерлек әйтелеп йөрөтөлгән "джилан", "йылан" атамаларына тап килә. Ғалим ошо этнонимдың төрки халыҡтарынан тик башҡорт халҡы составында ғына булыуын билдәләй.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# АТЫБЫҘ - УРАН, ЗАТЫБЫҘ БАШҠОРТ БЕҘҘЕҢ



Тарихи әҙәбиәттә уран ырыуының килеп сығышы хаҡында тағы ла бер версия бар, уны тарихсы-ғалимдар иғтибарына тикшеренеүсе С.М. Ахинжанов тәҡдим иткән. Уның ғилми фаразы ике тарихи документта килтерелгән мәғлүмәтте сағыштырып ҡарауға нигеҙләнгән. Тәүгеһе - XII быуатта йәшәгән әрмән яҙыусыһы Матвей Эдесский яҙмаларынан алынған: "...499 йылда (1850 йылдың 9 марты - 1851 йылдың 8 марты) римляндар ҡот осҡос һөжүмдәр кисерҙе. Бик күп провинциялар ҡырып бөтөрөүгә ҡаныҡҡан бәшәнәк халҡы тарафынан таланды, үлемгә дусар ителде һәм харабаларға әүерелде... Йыландар ҡәүеменең, үҙ территорияһы сиктәрен боҙоп, "ерән сәслеләр" ерәнә сығыуы сәбәпле, һәм был эмигранттар уғыҙҙарҙы һәм бәшәнәктәрҙе ҡыуып ебәргәс, һәм ошо барса ҡәүемдәр, үҙ нәфрәттәрен римляндарға йүнәлтеп, берләште. Константинополь оло бәләләргә дусар ителде..."

Шуға оҡшаш мәғлүмәттәр XII быуатта йәшәгән ғәрәп авторы Шәрәф аз-Заман әл Марвази яҙмаларында ла килтерелә, айырма тик шунда ғына - Матвей Эдесский "йыландар ҡәүеме" тип атаған халыҡты ул үҙ иҫеме аҫтында - ҡай тип атай: "Улар (төркиҙәр) араһында кун тип аталған кешеләр төркөмө бар, улар, ҡытай ханынан ҡурҡып, Ҡытай еренән килде... Уларҙы ҡай исемле ҡәүем эҙәрлекләне... Шунан кундар шары ерҙәренә күсеп килде, ә шарылар төркмән ерҙәренә күсенде. Төркмәндәр уғыҙ ерҙәренә күсенде, ә уғыҙҙар Әрмән дингеҙенә яҡын булған бәшәнәк ерҙәренә күсеп килде..." С.М. Ахинжанов фекеренсә, "ҡай" атамаһы боронғо монгол теле диалекттарының береһендә йылан мәғәнәһендә ҡулланылған. Әрмән авторы Матвей Эдесский һәм әл Марвази телгә алған "йылан" ҡәүеме һәм "ҡай" халҡы бер-береһенә тап килә, сөнки улар бәйән иткән ваҡиғалар бер үк замanда һәм бер үк урында бара. Бында тәүге авторҙың "ерән сәслеләре" икенсеһенең "шары" ("сары") тип атаған ҡәүеменә тура килә - һис шикһеҙ, шул атамалар аҫтында рустарҙа "половцы", төркиҙәрҙә "ҡыпсаҡтар" тип аталған халыҡтар хаҡында һүҙ бара.

Артабан М.С. Ахинжанов "йыландар ҡәүеменең" төрки эквиваленты булыу мөмкинлеге хаҡында яҙа. Ул бер үк төрлә тиерлек әйтелеп йөрөтөлгән "джилан", "йылан" атамаларына тап килә. Ошо этнонимдың төрки халыҡтарынан тик башҡорт халҡы составында ғына булыуын билдәләй. Әммә, ғалим йылан тамғалы ҡай ҡәбиләһенең төркиҙәрҙә башҡа бер атама - уран тип аталыу мөмкинлеген дә күҙаллай.

Этнолог С.М. Ахинжанов фаразлауынса, монголдарҙың "ҡай" (йылан) һүҙенә төркисә "уран" этнонимы тура килә. Уран ҡәбиләһе Дәште Ҡыпсаҡ далаларында киң билдәле була. Ғалим үҙ фаразын раҫлау маҡсатында XIII быуатта төҙөлгән "Төрки-ғәрәп тәржемәсеһе" һүҙлегендә төркиҙәрҙә йылан һүҙенең ике төрлә варианты булыуын иғтибарға ала: "Змея - илан; змея-гадюка - уран". Тимәк, боронғо төрки телендә ҡара йылан "уран" тип аталған. Ғалим фекеренсә, был һүҙ төркисә "ура", "уралыу" һүҙҙәре менән тамырҙаш икән. Әлбиттә, был осраҡта башҡорт ырыуҙары араһында ҙур ҡәүемдәр иҫәбенә ингән йылан ырыуы булыуын да иҫәпкә алырға кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта төркиҡыпсаҡ донъяһында "урянхай" йәиһә "уранҡай" рәүешендә аталып йөрөтөлгән ҡәүем дә билдәле була. С.М. Ахинжанов ошо хаҡта былай тип яҙа: "Ентекләберәк ҡарағанда, уранҡай этнонимының композит составлы икәне, яҡшы билдәле булған ике этнонимдан - уран һәм ҡай (уран+ҡай) атамаларынан хасил булыуы күренә, бында ошо гибрид атаманың һәр өлөшө үҙ теленән (төрки һәм монгол) йылан, тип тәржемәләнә. Ошо һүҙбәйләнеште тулыһынса тәржемә иткәндә уның "йылан+йылан" рәүешендә булыуын фараз итергә була. Был төрлә телдәргә ҡараған бер үк мәғәнәле ике һүҙҙең бер-береһенә ҡушылыуынан хасил булған этноним миҫалы ул, былдай осраҡтар Тоньяҡ-Көнсығыш Монголия һәм Көнбайыш Маньчжурия кеүек контакт зоналар өсөн типик күренеш..."

Күренекле совет синологы (Ҡытай буйынса белгес) Н.В. Кюнер Ҡытай хроникаларында "улянха" формаһында аталып йөрөтөлгән ҡәүемдең боронғо тарихи осорҙарҙа киң билдәле булған "хи" исемле ҙур этник берләшмә вариҫтарынан булыуын фараз итә. Бының өсөн тейешле ерлек тә бар - "Сюйвэнь-сянь тункао" (1772 г.) тип аталған Ҡытай яҙмаларында ошондай мәғлүмәт бар икән: "Улянха - ул тәүҙәрәк Чуньцю дәүеренә ҡараған шаньжундарҙың (тау жундары) үҙ ере. Цинь (династия) (221-206 йылдар) уны Ляосицзюндең төньяҡ сиге итеп тотто. Хань (оло йәки көнбайыш династия) уны си (хи) халҡы башлығының биләмәһе итте".

Шулай уҡ П.Пельо, В. Минорский һәм Ю.Зуев үҙ тикшеренеүҙәрендә Ҡытай йылъяҙмаларында йыш осрай торған "хи" йәиһә "си" терминдарының халыҡ телендә "hai", йәғни "ҡай" рәүешендә ҡулланып йөрөтөлөүен билдәләй. Белгес К.Г. Менгес "si" этимонының хәҙерге ҡытай теленең кантон диалектында боронғоса "haj"рәүешендә һаҡланып ҡалыуы хаҡында яҙа. Хи (ҡай) ҡәбиләһенең тарихи килеп сығышы һәм яҙмышы хаҡында беҙ әүәлерәк баҫылып сыҡҡан материалдарыбыҙҙа ентекләп яҙғайныҡ инде ("Йылан ырыуынан, боронғо башҡорт затынан беҙ", №№ 31 - 34, 1920 йыл).

XII быуатта йәшәгән тел белгесе Мәхмүт Ҡашғари былай тип яҙған: "Чомул ҡәбиләһенен, сүлдә йәшәүсе ҡәүем булғанлыҡтан, айырым теле бар, әммә улар төрки телен яҡшы белә. Ҡай, Ябаку, Татар, Басмыл да шундайҙар иҫәбенән". Күрәһең, был ҡәбиләләр ҡасандыр монгол телле булып, ваҡыттар үтеү менән төрки теленә күскән.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

**Фронттан Башҡортостанға ебәрелгән документтар ҙа байтаҡ. Бына уларҙың бер нисәһе (эпоханың сәйәси һәм тел үҙенсәлектәре тулыһынса һаҡланды):**

**Һеҙҙең ышанысығыҙҙы аҡларбыҙ**

*ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетенә, Башсовнаркомға, Верховный Совет Президиумына һәм Башҡортостандың бөтә халҡтарына.*
*Подполковник Кусимов часе боецтарынан, командирҙәренән һәм политработниктәренән хат.*

**Ҡәҙерле иптәштәр!**

Һеҙгә, орденле Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә, беҙҙең ҡәҙерле яҡташтарыбыҙға, һеҙҙең уландарығыҙҙан, башҡорт кавалерия дивизияһы боецтарынан ҡайнар, боевой сәләм.

Ҡәҙерле яҡташтар! Бөйөк Ватан һуғышына киткәндә һеҙ беҙгә ҙур наказдар бирҙегеҙ, һөйөклө илебеҙҙең изге ерен һаҡлау өсөн көс йәлләмәйенсә һуғышырға, батыр һуғышырға, яуыз дошманды аяуһыҙ ҡыйратырға ҡуштығыҙ.

Беҙ был наказды намыҫ менән үтәргә тырышабыҙ, иптәштәр. Уҙған һуғыштарҙа беҙҙең боецтар, командирҙар һәм политработниктар насар һуғышманылар. Юғары командование приказдары үтәлә килде, боецтар, командирҙар һәм политработниктар тыуған илгә ысын күңелдәренән бирелгәнлектәрен күрһәттеләр.

Бына беҙҙең батыр көрәшселәребеҙҙән ҡайһы бер иптәштәрҙең исемлектәре: младший лейтенант Яйыҡбаев Абдрахман пулеметтан атып 70 немецте үлтерҙе. Ул хәҙер подразделение менән командовать итә. Боец Сәйфи Султангәрәев, Маҡсутов Искәндәр, Минигужа Шәрипов, Миннислам Нарынбаев иптәштәр тиҫтәләгән һәм йөҙәрләгән немецте үлтерҙеләр. Шул көрәштәре өсөн хөкүмәтебеҙ уларҙы юғары наградалар менән наградланы. Былдай воиндар беҙҙә тиҫтәләп иҫәпләнәләр. Халҡ бәхете өсөн көрәштә, һеҙҙең тарафтан тәрбиәләнеп үҫтерелгән воиндар көстәрен дә, йәндәрен до ҡыҙғанмайҙар, кәрәк була икән, улар үҙҙәрен ҡорбан итәләр, ләкин бер генә аҙым да артҡа сигенмәйенсә совет ерен һаҡлайҙар.

Политрук ярҙамсыһы коммунист Янбеков Исхаҡ, көрәштә бар боецтарҙы рухландырып, һуғыштың иң ҡаты урындарына ташланды, ауыр яраланыуына ҡарамаҫтан, һуғыш майҙанынан сыҡмайынса һуңғы һулышынаса батырҙарса көрәшеүен дауам итте.

Башҡорт халҡының тоғро улы Ғабдылхаков һуңғы һулышына тиклем геройҙарса көрәшеп үлде.

Беҙҙең снайперҙар актив һуғыш хәрәкәттәре барған ваҡыттарҙа ла дошманға тынлыҡ бирмәйҙәр. Уны көн һайын берәмләп булһа ла сүпләйҙәр. Снайпер Ғәләм Сәлихов, Нурғәли Ырысбаев, Һиҙиәт Салауатов, Фәйзулла Сибаев иптәштәрҙең счеттарында үлтерелгән немецтәрҙең һаны тиҫтәләп иҫәпләнә һәм көндән-көн үҫә бара.

Бына һеҙҙең наказдарығыҙҙы шулай үтәйбеҙ, иптәштәр. Шулай ҙа беҙ үҙ бурысыбыҙҙы тулыһынса үтәнек тип иҫәпләмәйбеҙ әле. Сөнки илебеҙ өҫтөндәге ҡурҡыныс бөтмәгән, йыртҡыс дошман аҙағынаса тар-мар ителмәгән. Шуға күрә лә һеҙҙең наказды иҫтә тотоп, киләсәктә дошманды тағы ла аяуһыҙыраҡ туҡмарға ышандырабыҙ.

Беҙҙе был көрәшкә илебеҙгә булған мөхәббәт рухландыра. Беҙ башҡорт халҡының беҙгә ҡарата булған аталарса хәстәрлеген һәм ярҙамын һәр ваҡыт күреп һәм һиҙеп торабыҙ, һуңғы ебәргән бай бүләктәрегеҙҙе алдыҡ, һәм һеҙҙең делегаттарығыҙ аша ебәргән өҫтәлмә наказдарығыҙҙы ла ишеттек. Был бүләк алыу көнө беҙҙең өсөн ҙур байрам булды, һәм беҙ немец оккупанттарын аҙағынаса ҡыйратҡансы барлыҡ көстәребеҙҙе һалып, ҡаныбыҙҙы һәм йәнебеҙҙе йәлләмәй көрәшергә ант иттек.

Тылда һеҙҙең кеүек батыр эшләүсе халҡ менән бергә беҙ немец оккупанттарын тулыһынса ҡыйратырбыҙ. Һәм сәскәләй илебеҙҙе элекке хәленә кире ҡайтарырбыҙ. Бының өсөн беҙҙең ҡулыбыҙҙа бөтә мөмкинселектәр бар. Был шикһеҙ ышаныслы, сөнки беҙҙең менән бөйөк полководец Сталин етәкселек итә.

Йәшәһен еңелмәҫ совет халҡы!

Йәшәһен бөйөк Сталин! Йәшәһен Ҡыҙыл Армияның һәм халҡтың ҡеүәте! Йәшәһен еңеү!

*Подполковник Кусимов Т., Батальонный комиссар Әлибаев С., Старший политрук Вәлиев, От. секр. ВЛКСМ Садиков, Старший сержант Нарымбаев, Политрук ярҙамсыһы Шәрипов, Ст. лейтенант Мамбеткулов, Политрук Хасанов, Ҡыҙыл армеец Салауатов, Ҡыҙыл армеец Салихов.*
*31 октябрь 1942 йыл.*

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Ауылдарыбыҙҙағы ул саҡтағы ҡыйлыҡтар, ысын ғына мәғәнәһендә, файҙалы органик ашлама сығанағы ине бит. Ул замандарҙа ашалып бөтмәй ҡалған аҙыҡ-түлектәр ҙә булманы, тип хәтерләйем.***

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЭЛЕККЕ СҮПЛЕКТӘР ҺАҒЫНДЫРА,

## йәки Донъя цивилизацияһы һәр саҡ яҡшығамы?..

**Мин унынсы синыфты тамамлаған йылда, экзамендарҙың балы етмәү сәбәпле, юғары уҡыу йортона инә алмағайным. Шул арала совхозда айына һикһән һум тирәһе (ул саҡтағы яҡынса бер айлыҡ эш хаҡы) стипендия түләп, ауыл йәштәрен уҡытыу өсөн трактор курсы астылыр. Ана шул курстарҙа уҡып, тракторист-машинист тигән һөнәр алып, яҙ аҙағындараҡ бер аҙ ғына тракторҙа эшләп алдым. Төшкө ашҡа туҡталған мәлдә, "эттергес" тағылған С-100 ("Сталинец") тракторын өйгә ҡыуып алып ҡайта инем. Миңә, әле ун ете генә йәштәге малайға, ауылдаштарым, атайым менән әсәйем алдында бер аҙ ғына маҡтанып алыу теләге лә булғандыр инде.**

### Ҡыйлыҡтан - картуфлыҡ

Ул ғына түгел әле: берҙән-бер көндө улар өсөн бер файҙалы эш тә атҡарғым килде. Атайымдың "Картуф ере иҫкергән, икенсе урынға күсерергә кәрәк ине", тип һөйләнгән һүҙҙәрен иҫләнем. Ауылыбыҙ янында ағып ятҡан кескәй генә Ҡойолоһаҙ шишмәһе арьяғындағы сүплеккә (беҙҙең яҡта уны "ҡыйлыҡ" тип атайҙар) әллә ҡасан "күҙем ҡыҙып" йөрөй ине. Күп тиҫтә йылдар бөтә ауыл халҡы йәйен-ҡышын бар ҡый-ғыпырын ана шул ергә түгә. Ауыл сүплеген ни өсөн шулай "һағынып" иҫкә ала икән был, тип ғәжәпләнәлер бәғзеләр. Кешеләр сығарып түккән ул саҡтағы ҡыйҙың фәҡәт мал аҙбарынан сыҡҡан һалам ҡатыш тиҙәктән генә ғибарәт булыуы хаҡында оло быуын кешеләре (айырыуса ауылдыҡылар) яҡшы белә. Әлеге трактор менән баяғы ҡыйлыҡтың өҫтөндәге һаламын эттереп, ҙур ғына майҙанды тигеҙләп тә ҡуйҙым. Элек уба-уба булып ятҡан ошо ерҙең һаламдан таҙартылған урынын хәҙерге берәй баҡсасы күрһә, әллә күпме хаҡ биреп, уға сат йәбәшеп ятыр ине, моғайын. Сөнки бер аҙ ғына һорғолтораҡ төҫтә булған тиреҫле был ер, беҙҙең яҡта әйтмешләй, "май кеүек" йомшаҡ ине...

Мин ерҙе һөрә башлағас, бер ҡасан да шундай ҙур машинала йөрөгәнемде күрмәгән атайым, баштараҡ бер аҙ борсолоп, яҡын-тирәмдә уралғылап йөрөнө лә, атын егеп, кинәт кенә әллә ҡайҙа юҡ булды. Кискә, мин эштән ҡайтыуға, ни күрәм: атайым әлеге тигеҙләнгән майҙан тирәләп урмандан киҫеп алып ҡайтҡан уҫаҡ бағаналары ултыртып, уратып алған. Иртәгәһен, йәш тал сыбыҡтары алып килеп, ситән үрә лә башланы. Хәҙер ауылдарҙа нисектер, әммә ул саҡта (етмешенсе йылдар башында) халыҡ баҡса биләмәләрен иркенләп, үҙе теләгән урында биләй ала ине. Килеп үлсәп, тикшеренеп йөрөгән кеше лә булманы. Шул йылдан алып атайымдарҙың картуфы "ҡутарылып" уңыр булып китте...

### Сүпкә алмашҡа - һыбыҙғылар

Хәҙерге мәл беҙҙең илдә генә түгел, ә бөтә донъяла әлеге ҡыйлыҡ мәсьәләһе бик киҫкен тороуы хаҡында көн дә ишетеп торабыҙ. Бар донъя уларҙан нисек ҡотолорға белмәй яр һала. Ә мин бөгөнгө сүплектәрҙе бынан ярты быуат элеккеһе менән сағыштырып алырға булдым әле. Ҡала ерендә бындай проблема нисек торғандыр, әммә ауылдарыбыҙҙағы ул саҡтағы ҡыйлыҡтар, ысын ғына мәғәнәһендә, файҙалы органик ашлама сығанағы ине бит. Ул замандарҙа ашалып бөтмәй ҡалған аҙыҡ-түлектәр ҙә булманы, тип хәтерләйем. Серемәй, тирә-яҡта сүп-сар булып ятҡан пластик әйберҙәрҙең, кәнсир банкаларының ҡалдыҡ-боҫтоҡтары бөтөнләйгә юҡ ине. Тимер-томор, әлбиттә, булманы түгел. Әммә улар булһа ла, йыл һайын Баймаҡтан бер "тимер йыйғыс" урыҫ йөк машинаһы менән килеп, тейәп алып китә торғайны. Һыбыҙғы (Баймаҡ яғында "һыҙғыртҡыс" тиҙәр), өрә торған шарҙар, тағы ниндәйҙер күҙ ҡыҙҙырғыс ваҡ-төйәк тәтәйҙәр алып килгән был урыҫҡа малай-шалай кемуҙарҙан теләһә ҡайҙа ятҡан тимер-томорҙо йыйып килтерә. Беҙҙең өйҙәге төбө тишелгән ҙур ғына боронғо еҙ самауырҙың, күмер үтегенең дә шунда иҫкергән металл һынпыҡтары араһында киткәне хәтеремдә (ҡасандыр ана шул самауырҙар музей әйберенә әйләнер, тип башыбыҙға ла килмәгәндер инде). Уның ҡарауы, беҙ, малайҙар, әлеге металл һынығына алмаштырып алған тәтәйҙәребеҙ менән бер-беребеҙгә маҡтаныша-маҡтаныша уйнай инек...

Тимер йыйғыстан тыш, ауылға "алама йыйғыс", "ҡағыҙ йыйғыс"тар килгеләй торғайны. Иҫкергән сепрәк-сапраҡты, өйҙә йыйылып киткән кәрәкмәгән гәзит-мәзиттәрҙе лә әлеге уйынсыҡтарға алмаштырырға ярата торғайныҡ. Тотоноуға яраҡһыҙ сепрәк, юрған-мурған һымаҡ аламалар ул саҡта әллә ни донъя тултырып та ятмағандыр инде, әммә кәрәге ҡалмаған шундай иҫке-моҫҡо әйберҙәр барыбыр табыла ине. Башлыса мамыҡ, етен, киндер һымаҡ тәбиғи сеймалдан яһалған (һәр төрлө синтетика түгел) был әйберҙәрҙе берәй нисек ҡабаттан эшкәртеп, өр-яңы сепрәк яһайҙар икән, тиҙәр ине. Иҫке ҡағыҙҙарҙы ла тап ана шулайтып яңыртҡалар, имеш...

Ҡыйлыҡтарҙа, әлбиттә, мал һөйәктәре лә осрай торғайны. Әммә улар оҙаҡ ятып булһа ла серей торған нәмәләр бит. Һөйәк йыйыусылар ҙа килеп сыҡҡылай башлағас, ветеринар булып эшләгән атайымдан ошо хаҡта һорашҡайным. "Һөйәкте онтап, тирмән аша үткәреп, "һөйәк оно" яһайҙар", - тип аңлатты ул миңә. Аҙыҡҡа ҡушып, колхоз-совхоз малдарына ашаталар икән уны. Шул он составында хайуандарҙың тәненә бик кәрәкле минералдар һәм витаминдар барлығы хаҡында ла белдем...

Ә хәҙерге бәләкәй генә булһа ла берәй ауылдың сүплеген күргәнегеҙ бармы? Минең быға иғтибар иткәнем бар. Ҡала еренә оҡшап барабыҙ, йәмәғәт. Һуңғы осоро тирә-яҡ мөхитте - экологияны һаҡлап алып ҡалыу хаҡында юҡҡа ғына саң ҡаҡмайҙар шул. Ауылдарыбыҙға ла яҡындағы ҡаланан әлеге "мусор" йыйғыс машиналар йөрөтә башланылар, әлхәмдүлиллаһ! Бына шул мәсьәләне хәл итергә башы еткән хөкүмәт кешеһенә мең рәхмәттәр әйтке килә. Тик ваҡытында ғына алып китеп торһондар. Ысынлап та бит, хәҙерге заман сүп-сарҙары күбәйеүенә ауыл халҡы һис кенә лә ғәйепле түгел. Заманаһы шуға ҡалғас, ни эшләйһең инде? Беҙҙең яҡта әйтмешләй, анауынса ҡый-ғыпырҙы ауылдаштарыбыҙ ҡайҙа ҡуйырға тейеш?..

### Ауырлыҡ берләштергән…

Ошо хаҡта уйлана башлаһаң, һәр төрлө фәлсәфәләргә төшөп китәһең. Беҙ, ярай, яңы цивилизация башланған осорҙа үҫтек. Ә боронғо беҙҙең ата-бабаларыбыҙ пластик һауыттарһыҙ, целлофан тоҡтарһыҙ, электрһыҙ, радиоалғысһыҙ, телефонһыҙ, телевизорһыҙ, компьютерһыҙ нисек йәшәгән икән? Ә бит йәшәгән! Ағастан яһалған һауыттарға йә иһә башкүнәк, турһыҡтарға һыу, ҡымыҙ ҡойоп, ағас туҫтаҡтар, ҡалаҡтар, киндер йә иһә етен тоҡтар, ҡайын туҙынан яһалған тырыздар менән файҙаланып көн күргән халҡыбыҙ (башкүнәк - һуйылған йылҡы малының бөтәүләй генә һыҙырып алынған баш тиреһенең ауыҙын асыҡ ҡалдырып, ҡолаҡ, күҙ тишектәрен, муйын асыҡлығын бөрөп тегеп, киптереп яһалған һауыт). Тиренән тегелгән итек, тундар, киндер, етен туҡыманан күлдәктәр тегеп кейеп йәшәгән боронғо ата-бабаларыбыҙ. Һарыҡ йөнөнән яһалған кейеҙ юрғандар, ҡаҙ мамығы тултырылған яҫтыҡ һымаҡ һис кенә лә синтетика ҡатышмаған, зыянһыҙ ҡаралтыларҙа йоҡлағандар. Автомобилһеҙ ҙә йәшәгәндәр. Һыбай йә иһә арба, сана егеп, бер-береһенә ҡунаҡҡа барышып, ауыл-ара ҡатнашып ғүмер иткәндәр. Сирләп-маҙар китһәләр, дарыу үләндәре, Ҡөрьән аяттары менән дауалай ҙа белгәндәр. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһы ла тиерлек "кендек инәһе" һөнәрен үҙләштереп, уларҙың бала табыуҙа бер-береһенә ярҙамлаша белеүе генә үҙе ни тора! Һәр бер ғаилә һигеҙ-унлаған бала ла тәрбиәләгән. Бала-сағаларын уҡытырға ла өлгөргәндәр. Донъяуи йә дини уҡыуҙарға килгәндә лә, башҡорт халҡы борондан белемгә ынтылған халыҡ булған. Әлбиттә, һәр төрлө янғын-маҙар һымаҡ бәлә-ҡазалар борон да булып торған инде, тормош бит. Әммә берәйһенең йорт-ҡураһы янып китә йә бүтән төр бәлә-ҡаза килә икән, башҡа ғаиләләргә (хатта үҙ туғаны булмаған хәлдә лә!) "өйҙәш" булып инеүҙәр ҙә - ғәҙәти күренеш булған. Әселе-сөсөлө бындай тормош әҙәм балаларын бер-береһе менән тик яҡынлаштырған ғына. "Әселе", тигәндәй, ә бөгөнгө көндә тормош ауырлыҡтары аҙмы ни?..



## Алға барабыҙ ҙа ул...

Хәҙерге дәүерҙә әкренләп тә түгел, ә ифрат тиҙ рәүештә, кешелектең көндән-көн алға барғанын күрәбеҙ. Боронғо әкиәттәрҙә лә телгә алынмаған һәр төрлө мөғжизәле фән асыштары, сәнәғәт үҫеше тәү ҡараүҙа кешеләр өсөн файҙалы ла һымаҡ. Әммә, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, быларҙың бик күптәренең кешелеккә ҡапма-ҡаршы йүнәлтелгәнен төҫмөрләүе лә ауыр түгел. "Саҡрым-саҡрым теҙелеп киткән телеграф бағанаһы. Хәҙер иҫке заман түгел - техника заманаһы", тип дәртләнеп йырлай торғайныҡ та ул ҡасандыр. Әммә ана шул хәҙерге "иҫ киткес" техника менән донъяны тултырыусы меңәрләгән заводтарҙан ағып сығып, йылғакүлдәребеҙҙе бысратҡан үлемесле ағыулы шыйыҡсаларҙы, торбаларҙан сыҡҡан газдарҙы ошоғаса нисек юҡ итергә өйрәнмәгәнбеҙ. Былар барыһы ла гәзиз еребеҙ ҡуйынында йә атмосфераБыҙҙа йыйыла килә. Борон бөтә Уралды тиерлек ҡаплап ултырған ҡара урмандарыбыҙ һирәгәйә. Минең тыуып үҫкән ауылым - Үрге Мәмбәт (Баймаҡ районында). Ауылымдың бер яғында урманлы Мәсеттау булһа, икенсе яғында - яланғас Сирагол тауы ята. Бала сағымда әсәйемдән: "Нишләп Сираголда ла шундай матур ағастар үҫмәй икән", - тип һорағаным бар. "Әүәле һәр төбө ҙурҙан бер ат йөгөндәй була торған эре ҡайын урманы менән ҡапланған ине был тау, - тигәйне әсәйем. - Һуғыш мәлендә, унан һуңыраҡ та был ағастарҙы ҡырҡып, Баймаҡ заводына ташып бөтөләр..." Бала сағымда (үҙем бер ҡасан да күрмәгән булыуыма ҡарамаҫтан) ана шул урманды ныҡ йәлләүем әле булһа иҫемдә. Ҡасандыр беҙҙән өлкәнерәк булған ағайҙар "ат йөҙҙәрен" йөрөгән, ҡолас буйы сыртан, шамбы балыҡтарына бай булған Таналыҡ йылғаһы хәҙер бала кеше аша һикереп сығырлыҡ кына булып ҡалған. Яр буйындағы ағастарын киҫкеләп, йылғаны быуып, кәрәккән-кәрәкмәгән һыуһаҡлағыстар яһау бына ошо хәлгә ҡалдырғанлығы хаҡында хәҙер бөтә кеше белә. Бына шундай күренештәр бер минең районымда ғына түгел бит. Бөтә илебеҙҙә, хатта Ер шарында тәбиғәтебеҙгә шундай йыртҡыстарса ҡараш дауам итә.

Ғәйәт ныҡ үҫешә барған йәҙрә физикаһы, химия фәненең "файҙалы" емештәрен бөтә Ер шары халҡы татый. Илебеҙ фашист Германияһын тармар итеп бөткәнен көтөп кенә торғандай, ҡырҡ бишенсе йылдың көҙөнә ҡарай бөтә донъяны тағы хафаға һалып, Америка Ҡушма Штаттары тарафынан ҡылынған оло енәйәтте - бер-нисә секунд эсендә әллә күпме тиҫтәләгән мең япон кешеһенең ғүмерен ҡыйған Хиросима, Нагасаки фажиғәләрен бер ҡасан да оноторлоҡ түгел. Уның менән генә эш бөтһә икән шул... Йәҙрә ҡоралын камиллаштырыу буйынса әле булһа бөтә донъя ярыша килә. Ундай "Хиросималар" (реаль шартлатыу менән атом бомбаһын һынауҙар) СССР дәүерендә үҙебеҙҙә лә етерлек булған, тик беҙ улар хаҡында бер ни ҙә белмәгәнбеҙ...

"Атомды тыныс тормошта эшкә ектек", тип тә маҡтандыҡ ҡасандыр. Гидроэлектростанцияларға ҡарағанда күпкә ҡеүәтлерәк булған, электр тоғы биреүсе бындай станцияларҙың ниндәй ҡурҡыныс һөҙөмтәгә килтереү ихтималлығын Чернобыль фажиғәһенән беләбеҙ. Шундағы һәләкәткә ҡаршы көрәшеүсе меңәрләгән кешенең "нурланыу сире"нә дусар булып, һәр төрлө яман шеш, ҡан ауырыуҙарына һабышып үлеүҙәре һәммәбеҙгә мәғлүм. Үҙебеҙҙең "картә артында ғына" булған Силәбе өлкәһендәге Ҡыштым ваҡиғаһы тураһында ла "эш үткәс", әлеге үҙгәртеп ҡороу, кемдер әйтмешләй, "гласность" мәлендә генә белеп ҡалдыҡ... Нисәмәләр йыл элек әлеге япон меҫкендәр тағы бер мәртәбә атом фажиғәһен кисерҙе. Фукусима аварияһы. Был юлы миллионлаған японлы үҙҙәренең "мирный" атомынан зыян күрҙе бит. Йәҙрә физикаһы "сәскә атҡан" хәҙерге дәүерҙә донъя буйынса күпме шундай "тыныс" ҡоролмалар потенциаль хәүеф сығанағы булып тора.

Алға киткән илдәрҙең йәшерен лабораторияларында әле булһа чума, туляремия, сыпной тиф һәм башҡа айырыуса хәүефле инфекция тыуҙырыусы микробтар, шулай уҡ, "зоман", "зарин", "хлорциан" кеүек төрлө көслө ағыулы химик матдәләр ҙә хәрби маҡсат менән ҡулланыуға тәғәйенләнгән "секретный" ҡорал арсеналы булып, кешелек донъяһына һөжүмгә һәр саҡ әҙер көйө һаҡлана. Донъялағы барлыҡ йәҙрә, бактериологик һәм химик ҡоралдарҙың Ер йөҙөндәге халыҡты әллә нисә мәртәбә юҡ итерлек булып йыйылып киткәнлеген дә фаразлай ғалимдар. Әлеге көндә коронавирус тип аталған йоғошло сирҙең барлыҡҡа килеүендә лә "кеше эҙе" барлығы хаҡында һүҙ йөрөй. Ҡасандыр ҡызылса, сәсәк, тиф һымаҡ әленәнәле сығып торған ауырыуҙарға ҡаршы эмәл тапһаҡ, был сирҙән һаман булһа дарыу таба алмайбыҙ бит, йәмәғәт. Донъя фәне ни тиклем алға китеүенә лә ҡарамаҫтан...

Шундай уйҙарҙы уйлай башлаһаң, ул ҡәҙәре фәнни асыштар эшләү кәрәкме икән, тип тә фекерләргә мәжбүр булаһың. Мәҡәләмдә "Элекке сүплектәр..." тигән һүҙҙәр менән башлап ебәргәйнем. Хәҙерге көндә Ер йөҙөндә әҙәм балалары тарафынан йыйылған, әллә ҡайҙан һаҫыҡ еҫ сығарып ятҡан сүп-сар өйөмдәре менән сағыштырып ҡарайым да, элекке ҡыйылыҡбыҙҙы һағынам. Ысын! Әүәлге ҡыйлыҡ тирәһенән үтеп барғанда, шулай ҙа, тәмле "ауыл еҫе" генә килә торғайны...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИШАРА

# УҠЫЙҺЫҢ ИКӘН,

## тимәк... фекерләйһең



**Мин кешелек тарихы ике ҙур эпоханан тора, тип иҫәпләргә баҙнат итәм. Уның тәүгеһе Ерҙә әҙәм заты барлыҡҡа килгәндән һуң күпме дауам иткәндер, анығыраҡ ҡына билдәләп тә булмай, әммә тап боронғо кешеләрҙең яҙма тел уйлап табыуы менән бергә цивилизация тип атап булырҙай яңы дәүер башлана. Аралашыу, һөйләү теленән айырмалы рәүештә, яҙма тел өр-яңы сифатҡа эйә, ул кешеләр танып белгән бар нәмәне мейе ҡабынан тышҡы матди мөхиткә сығарып, быуындан-быуынға тапшырып булырҙай итеп, теркәп ҡуйыу һәм күп быуаттар буйы һаҡлау мөмкинлеген бирә. Әйткән һүҙендә яҙма билдәләргә әйләндереү мөмкинлеген асҡан тәү кешене мин кешелектең бөйөк революционеры, тип атар инем.**

Яҙыу тигән төшөнсә нисек боронғо булһа, уның менән йәнәш торған уҡыу ҙа шулай: яҙғанды уҡып булмай икән, унан бер фәтүә лә юҡ бит. Уҡыу-яҙыу булғас, уға өйрәтеүселәр - уҡытыусылар ҙа кәрәкле булып, улар йәмғиәттең бик абруйлы ҡатламын, хәҙергесә әйткәндә, тәү быуын интеллигенцияһын барлыҡҡа килтергән. Шулай итеп, уҡыу-уҡытыу даирәһе, киңәйгәндән-киңәйә барып, кешеләрҙең, тотош йәмғиәттең йәшәйеш торошон, үҫешен тәьмин итеү өсөн төп шарттарҙың береһенә әйләнгән.

Тәүҙәрәк уҡыу уҡый-яҙа белергә өйрәнеү менән генә сикләнһә, был төшөнсә бөгөн белем алыу, төрлө һөнәрҙәргә өйрәнеү, аң ҡеүәһен үҫтереү, төплө һәм ижади фекерләү мөмкинлегенә эйә булыуҙы аңлата. Тормошобоҙҙо уҡыуҙан, йәмғиәт һәм дәүләтебеҙҙе уҡыу-уҡытыу өсөн мөмкинлек тыуҙырған мәғарифтан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Боронғосараҡ әйтһәк, уҡымышлы шәхестәрҙән торған йәмғиәт кенә бөгөнгө халыҡ-ара конкуренция көсәйеп, бер үк ваҡытта глобалләшеү процестары барған осорҙа ил һәм милләттәргә үҙ-үҙен һаҡлап ҡала алыу мөмкинлеген бирә.

Бөгөн илебеҙҙә уҡыу хәлдәре нисегерәк тора һуң? Ни эшләп ошо кеше аңын, уның шәхесен биҙәп, уны мәҙәни бейеклеккә күтәрә ала торған уҡыуға, белемгә ынтылыш көсө кәмегәндән-кәмей бара? Ошондай һорауҙар бер мине генә борсомайҙыр ул. XIX быуатта йәшәгән мәғрифәтсебеҙ Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк, арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк" тигән саҡырыуы көн талабына әйләнгәндәй тойола миңә. Буш һүҙ булмаһын, тиһәк, бер-ике миҫал килтерәйек. Хәҙерге заман урта мәктәбен тамамлап, эшкә инер өсөн өлгөнән күсереп (!) гариза яҙған бер егетебеҙ ошо ҡағыҙ киҫәгендәге ике һөйләмдә биш-алты хата ебәргән. Үҙ күҙем менән күрмәһәм, ышанмаҫ та инем. Наполеонды немец генералы тип белеүселәр ҙә юҡ түгел бөгөн. Бындай осраҡтарҙы иҫәпләп-һанап, осона сығырлыҡ та түгел. Ысынлап та, ун - ун бер йыл буйы мәктәп парталары артында ултырып та, йәштәребеҙҙең ҙур бер өлөшө тома наҙан ҡала түгелме һуң? Был һығымта менән, бәлки, килешеп тә булмаҫ ине, әммә ысынбарлыҡты матурлап-биҙәп кенә яҡшыртып булмай шул. Мәктәптәрҙә уҙғарылған быйылғы Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре шаҡ ҡатырырлыҡ насар булһа ла, ошоно күрмәмеш тә белмәмеш булыусылар (ә ундайҙар мәғариф системаһында эшләүселәр араһында ла бихисап) бер ниндәй анализ һәм һығымталар эшләргә ашығып бармай.

Бөтә нәмә сағыштырыу аша дөрөҫ баһалана, тиҙәр. Уҙған быуатта, хәҙерге осорҙа яманаты сығарылған совет дәүерендә, мәғариф мәсьәләләренә ил етәкселеге иғтибар үҙәгенән ысҡындырманы, уҡыу-уҡытыу торошон көйләү, уның сифатын күтәреү өсөн мәғариф хеҙмәткәрҙәре күп көс һалды. Һөҙөмтәлә быуат башында халҡы ярым наҙан булған ил 40-50 йыл эсендә атом серҙәрен аса алып, йыһан киңлеген үҙләштерә алырлыҡ ҡеүәтле индустрияһы һәм, иң мөһиме, донъя кимәлендә танылыу тапҡан ғалимдары булған алдынғы державаға әйләнде. Был үҙе үк мөғжизәгә тиң ине.

Уйлап ҡараһаң, ул ваҡытта мәктәптәр һәйбәт йыһазландырылмаған, уҡыу әсбаптары ла етешмәгән, техник саралярҙан микроскоп-фильмоскоптан башҡа әллә ни булмаған, электроника хыялда ғына йөрөгән заман булған бит инде. Ә һөҙөмтәләр - иҫ киткес! Мин шәхсән ошоға сәбәп итеп тик бер генә нәмәне күрһәтер инем. Ул - уҡыу, һәм уҡыуға ынтылыу. Хәтерегеҙҙәлер: ул саҡтарҙа үҙенә кәрәкле һәйбәт китапҡа эйә булыу өсөн кеше ваҡытын да, аҡсаһын да һис йәлләмәҫ булды. Хатта илдә үҙенә күрә китап ҡытлығы булды, тип тә әйтергә була. Студент сағымда тик алдан яҙылыу буйынса ғына һатыуға сығарылған махсус баҫмаға эйә булыр өсөн (яҙылыусыһы килеп алмаған осраҡта) ун биш көн буйына Мәскәүҙең бер китап магазинына барып йөрөгәнем хәтерҙә ҡалған. Китап уҡыу ошо замандың иң күркәм сифаттарының береһе булды. Советтар Союзы хаҡлы рәүештә китап уҡыусылар иле, тип нарыҡланды.

Хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары элеккеләре менән сағыштырырлыҡ түгел, әлбиттә. Интернетта йөҙөп йөрөп, йәнеңә ни теләйһең, шундай мәғлүмәтте "һә" тигәнсе табырға була. Әммә... әммә наҙанлыҡ ҡайҙан килә һуң?

Минеңсә, кеше мәғлүмәтте төрлөсә үҙләштерә, сөнки ул төрлө формаларҙа һәм төрлө ысулдар менән бирелә. Телевидениенан, радионан тапшырыла торғандары махсус рәүештә эшкәртелеп, кешелә мотлаҡ билдәле бер эмоциональ кисереш булдырыу нигеҙендә ҡорола. Дөрөҫөн әйткәндә, бында кеше мейеһен, уның аңын билдәле бер мәғлүмәти программаға көйләү барлыҡҡа килә, мин быны "телебәйлелек", тип атар инем. Күптәрегеҙ иғтибар иткәндер: беҙҙе бимазалаған телевизион реклама хатта кескәй генә балаларҙың иғтибарын тулыһынса үҙенә йәлеп итә алыу көсөнә эйә. Телевидение аша беҙҙең менән марионеткаларҙай идара итәләр, беҙ ошоно аңлап ҡына еткермәйбеҙ...

Ә уҡыу килгәндә, бында бөтөнләй икенсе механизмдар өҫтөнлөк итә. Иң мөһиме, һин был процесс менән үҙең идара итәһең. Телевизор ҡарағанда кешене хис-кисереш биләһә, китап уҡығанда фекерләү процестары әүҙемләшә. Тап шуның өсөн дә беҙ уҡығанда ваҡыты-ваҡыты менән пауза эшләйбеҙ, уҡылғанға кире әйләнеп ҡайтабыҙ һ.б. Кемделер тыңлағанда кеше пассив позицияла булһа, уҡыу барышында ул үҙ-үҙе менән эстән генә идара итә, уға эске әүҙемлек хас була. Бына ошолар уҡыу процесының кеше аңын үҫтереү өсөн үтә файҙалы булыуын күрһәтеп тора.

Әйткәндәй, гәзит-журнал уҡыусылар ҙа ныҡ һирәгәйҙе арабыҙҙа. Был беҙҙең мәҙәни халәтебеҙе түбәнәйтеп, әле бәйән ителгән эске торошобоҙҙо фәһемле мәғлүмәт менән байытыу мөмкинлегенән мәхрүм итә. Китап, гәзит-журнал уҡып үҫмәгән балаларҙың аң ҡеүәһе аҡрын үҫешә икәнлеген дә ололарға онотorға ярамаҫ ине. Үҙегеҙ гәзит-журналдарға яҙылып, даими уҡый барып, балаларығыҙға кескәй саҡтарынан уҡ өлгө булыу зарур. Уҡыу менән бәйле ошо уй-фекерҙәремде туған-тыумасаларығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә, таныш-белештәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡыуҙың да ни тиклем файҙалы һәм фәһемле булыуын аңлатһағыҙ ине, тигән саҡырыу менән тамамлайым.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

***✓ Артҡы ултырғыста ятҡан Риана машина ҡаты итеп һиңкегәндән уянып китте. Һөйөклө ире менән күрешергә китеп барыуы шундуҡ иҫенә төштө. Тороп ултырҙы һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Йөрөтмән...***




Шул саҡ Сараның телефоны шылтыраны. Дисплейҙа улының исеме сыҡты. Ҡалай мәлһеҙ! Күрәһең, Ирек әсәһен эҙләй. Ул бер нәмә лә уйлап өлгөрмәне, Риана иптәшенең ҡулынан телефонын шарт тартып алды һәм күкрәк тауышы менән:

- Юҡ-юҡ, ярҙам кәрәкмәй, шул позицияла ҡалығыҙ! Конец! - тип һүндерә һалды.

Сара шул ике арала Аликтың телефонын аса һалып, улының фотоларын юйҙырҙы. Ҡыҙҙыҡында ундай-бындай шикле һүрәттәр күренмәне.

- Ҡайҙа кисә алған әйберҙәрегеҙ? - Риана ҡыҙға ҡарап аҡырҙы. - Тағы ниндәй телефондар бар, сығар! - Үҙе ҡулын кобураһы тирәһендә йөрөтөп алды. Рената тиҙ генә диван аҫтынан бер нисә гаджет һалынған ҡумта сығарҙы. Сара улының телефонын танып, шундуҡ эләктерҙе һәм төргәккә күрһәтеп, Ренатаға өндәште:

- Бына ошо нәмә башыңды ашаясаҡ. Әллә төрмә тормошо ныҡыраҡ оҡшаймы?

- Мин... Мин түгел. Быны бит... - Ҡыҙ Аликҡа ҡараны.

- Яп ауыҙыңды, кәнтәй, - тип ыҫылданы Алик. - Мин кемдәр менән һөйләшәм әлеге мәлдә?

- Өлкән сержант Риана Ҡарасова үткәрә операцияны! - тине Риана.

- Ғәйебегеҙҙе танып, үҙегеҙ бараһығыҙмы, әллә беҙҙең һаҡ аҫтында барыу ныҡыраҡ оҡшаймы? - тине Сара. - Аҫта өс экипаж көтә.

- Һин алйот арҡаһында мин бәләгә тарыным! Һин ҡоторттоң, ҡәбәхәт! - тип ҡысҡырҙы Рената Аликҡа.

- Рената, һинең әле башың йәш. Төрмәгә бер барып эләкһәң, анһат ҡотолоу юҡ. Беҙ үҙебеҙ ҡатын-ҡыҙ булараҡ, һинең хәләңә инәбеҙ. Аңлаһыңмы нимә әйтергә теләгәнде? Сейфтан алған нәмәләрҙе кире алып барып һалаһың, йәки эш судҡа китә. Әле хужалар йорттарына төшкәндәрен белмәйҙәр, ләкин бер сәғәттән мәғлүм буласаҡ. Был, бөтәһенән элек, һине бәләнән йолоп ҡалыу өсөн эшләнә. Рената-а-а... - Сара үҙенең телефонына күрһәтте. - Бөтәһе лә яҙылды. Был һуңғы иҫкәртеү.

Ҡатындар гаджеттар һалынған йәшникте үҙҙәре менән алдылар ҙа, ишекте шарт ябып сығып киттеләр. Тулҡынланыуҙан йөрәге дарҫлап типкән, тыны ҡыҫылған Сара машинаға нисек барып ултырғанын да хәтерләмәй. Ярай эргәһендә туҡтауһыҙ таҡылдаған Риана булды. Ошо талымһыҙ, әрһеҙ күршеһенән тыш, спектаклде уңышлы уйнап булмаҫ ине. Салонға инеп ултырғас, ул Риананы ҡосаҡлап алды.

- Рәхмәт, Риана, бер үҙем булдыра алмаҫ инем.

- Тағы саҡыр! Запаста бита ята әле!

- Юҡ-юҡ, бындай хәлгә тарыуҙан Аллам һаҡлаһын!

Риана һаһылдап көлөп ебәрҙе, шунан ҡапыл етдиләнде.

- Сара, дөрөҫөн әйт, минең һинә бурысым бармы-юҡмы?

- Юҡ, ҡәҙерле Риана! Артығы менән түләнең, - шулай тине лә Сара ҡысҡырып илап ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

- Уй-уй, туҡта! Ҡурҡытма мине! Аңлайым хәлеңде Саракайым! Әсәләр бала хаҡына ниндәй генә утҡа инмәй. Һыпырттыҡ был тирәнән!

Уртын сәйнәп тәҙрә төбөндә баҫып торған Алик бер заман ҡапыл артҡа тайшанды.

- Улар аферистар! - тип ҡысҡырҙы Ренатаға. - Ана, һары "Лада"! Үтеп киткән булдылар! Һары серек арба! Күрҙеңме! Был бит теге анра малайҙың хәйләһе! Уның емерек машинаһы! О-о-о-о! Вот, беҙҙе ышандырҙылар! Кемде-кемде, мине төп башына ултырттылар, - тип үҙенең маңлайына шап иттереп һуҡты. - Тимәк, биҙәүестәрҙе кире алып бармайбыҙ!

- Һин әҙәм аҡтығы! - тип ҡысҡырҙы Рената нәфрәтенә быуылып. - Минең башты төрмәлә серетмәксеһеңме? Юғал күҙ алдымдан, ҡәбәхәт. Кем генә булмаһындар, улар бөтөн һөйләшеүҙе яҙып алдылар. Бәлки, видеоға ла төшөргәндәрҙер. Юғал, тием күҙ алдымдан!

- Һин нимә, Рената! Улар үҙҙәренә кәрәк нәмәне алып ҡастылар!

Төйөнсөктө баш осонда һелккән Рената аҡыра башланы:

- Шакал! Хәшәрәт! Эҙең булмаһын был тирәлә! Етлекмәй тыуған! - Шунан ишекте тибеп асты. - Юҡ бул!

Алик һүгенә-һүгенә аяғына кроссовкаһын ҡатты:

- Мин бөтәгеҙҙән дә үс аласаҡмын, кәнтәйҙәр! Ә һин берәүгә лә кәрәкмәгән нишана, гәрип! - Ренатаны һелтәй һуҡты ла, сығып китте.

Был юлы Сара улы Иректе Силәбегә тыныс күңел менән оҙатты. Әле алған һабағын улы ғүмере буйы иҫендә тотасағын әсә белә.

Смена алмашына, инде ирҙе ҡаршы алырға әҙерләнергә кәрәк. Рауил был юлы шылтыратҡанында: "Юл ыңғайында Силәбегә һуғылам. Ирекке күрәм, бергә торған иптәштәре менән дә танышырмын", - тине. Дөрөҫ эшләй, ата кеше улы менән йышыраҡ күрешергә тейеш. Ә ике көндән улы шылтыратты.

- Әсәй, һөйөнсө!

Сара һағая төштө:

- Һөйөнсөгә бер самауыр сәй, тиҙәр ине, боронголар.

- Атайым менән автосалонда йөрөйбөҙ.

- Автосалонда? - тип ҡабатлап һораны әсә.

- Эйе, дөрөҫ ишетәһең, әсәй! Атайым һинә сюрприз яһамаҡсы ине, но мин әйтмәй түҙмәнем. Шәп япон машинаһы менән ҡайтып төшмәксебеҙ, "Тойота"ны һайланыҡ. Әле атайым документтарын тултыра. Беҙҙе алда Силәбе-Өфө маршруты көтә.

Сара улы менән ҡуша балаларса ҡыуанды. Бына, ниһайәт, улар ҙа яңы машиналы буласаҡ. Шундай шәп яңылыҡ менән нисек уртаҡлашмай түҙәһең, ти инде? Ул Ләлә һеңлеһенә хәбәр итте. Трубкаһын һалырға өлгөрмәне, тегенең өлкән улы Сөләймән шылтыратырға тотондо.

- Сара инәй, ә иҫке машинағыҙҙы ҡайҙа итәһегеҙ?

- Теләһәң, һинә бирербеҙ, - тип көлдө Сара.

- Теләйем! Мин уны үҙебеҙҙең Шамунға апҡайтам.

- Һин бит йөрөтә белмәйһең, нисек алып ҡайтаһың?

- Апарышырһығыҙ!

Бына көткән көн дә килеп етте, ире менән улы бергәләшеп ҡайтыр юлға сыҡҡандар. Сара йүгереп йөрөп Рауилы яратҡан һалмалы аш әҙерләне, улы яратҡан гөбәҙиәне бешерҙе. Инде магазинға барып, тәмләткестәр генә алаһы ҡалды. Көйләй-көйләй фатирҙан сығып, баҫҡыс буйлап төшә башлағайны, аҫта ла көйләгән тауыш ишетелде. Сара көләмһөрәне: "Кызыҡ, тағы ла кемдеңдер өйөндә байрам". Ә өҫкә күтәрелеүсе Риана ине. Ул ҙур ғына гөлләмә тотоп алған.

- Минең тыуған көнөм, Сара! Әле эштән ҡайтып киләм. Тыуған көн хөрмәтенә минең эш көнөн ҡыҫҡарттылар!

- Ҡотлайым! - Сара күршеһен ҡосаҡланы ла, ирекһеҙҙән, үҙе шундуҡ артҡа тайшанды. Эштең нимәлә икәнен һиҙҙе Риана:

- Эстек, ну күп түгел! Шулайныҡ борлайыммы ни?

- Ярай, мин ашығам. Инеп ҡотлармын үҙеңде аҙаҡ.

- Дуҫҡайым! - Риана уның беләгенән тотоп алды.

- Нимә булды?

Риананың ауыҙы йырылды

- Нияз шылтыратып ҡотланы. Ул Алексеевкала әсәһендә ине бит. Ауырып ята икән. Кил, тине. Алып барып ҡуй мине, Сара. Юҡ, тимә! Һылтау эҙләмә.

Риана, бер тотам да ҡалмай, Сараға эйәреп сыҡты. Хәҙер бер бәйләнһә, унан ҡотолоу юҡ. Әллә алып барып ҡуйырғамы, юл асыҡ булһа, бер егерме минут ваҡытын ғына сарыф итер.

- Еҫ сыға тиһәң, мин ауыҙымды ҡаплап ултырырмын. Юҡ, артҡа ултырам, тик алып бар, - тине Риана.

"Лада"ның ишеген асыу менән, Риана вәғәҙә иткәненсә, артҡы яҡҡа инеп ҡунаҡланы. Сара инде үҙе ултырам тигән саҡта ғына эргәләренә жыйт итеп "Рено-Логан" килеп туҡтаны. Унан кемуҙарҙан һеңлеһе, кейәүе, балалары атылып килеп сыҡтылар.

- Сюрприз!

Ысынлап та, сюрприз, киләбеҙ, тип хәбәр итмәгәйнеләр. Сара туғандарын алмаштилмәш ҡосаҡланы, салон эсендә ултырған Рианаға өндәште.

- Риана, ғәфү ит! Туғандарымды ҡалдырып китә алмайым! Такси тот, йәме.

Ире Нияз менән телефондан баш ҡаға-ҡаға һөйләшеп ултырған Риана Сара әйткәндәрҙе ишетмәне:

- Нияз, йәнем. Урыныңдан ҡуҙғалма, тыныс ҡына ят. Юҡ-юҡ, үҙем барып алып ҡайтам. Хәҙер Сара менән килеп етәбеҙ. Көт, йәнем! Эйе-эйе, Сара менән!

Сара Риананың баш ҡаҡҡанын күреп, үҙенең үтенесенә риза, тип уйлап, иркен һулап, туғандарын өй яғына әйҙәне. Сөләймән генә ҡарышты, "Лада"ға күрһәтеп:

- Минең автомобиль бында, - тине.

- Сәй эсерәм, аҙ ғына сабыр ит! Нишләп саҡ ҡына сыҙамлығың юҡ? - тине Сара.

- Хәҙер, инәй! Сәй ҡайнағансы үк инәм!

Риана "Лада"ның эргәһенә килеп баҫҡан Сөләймәндән һораны:

- Сара инәйең нимә тине? Ҡасан сыға?

- Сәй эсерәм дә сығам, биш минуттан, тине.

Риана ризаһыҙ ғына баш сайҡаны, шулай ҙа көтмәй хәл юҡ, ултыра торғас, ул ойоғанын да һиҙмәй ҡалды һәм иркенләп артҡа һуҙылып ятты.

Туғандар менән өйҙә шау-гөр килеп сәй эсеп ултырғанда Сараға Рауил шылтыратты. Аталы уллы, бәҡтиһәң, Өфөгә ҡайтып төшөү менән туп-тура автомобилдәрен иҫәпкә ҡуйырға инспекция бүлексәһенә киткәндәр икән.

- Улай булғас, сауҙа үҙәгенә барып киләйем, өлгөрһәм, мин дә тура инспекцияға барырмын, - тине кейәү.

- Кейәү, улайһа, мин дә һинең менән, бүлексәгә барып, ҡәҙерлеләремә сюрприз эшләйем әле. Ләлә һылыу, һин ашһыуҙы ҡараштыр, - тип Сара сумкаһын күтәреп алды. - Сөләймән улым, минең... әй әттәгенәһе, һинең машинаң бикләнмәгән. Бикләрһең,- тип асҡысҡа күрһәтте һәм урамға сығып, кейәүенә ултырып, сауҙа үҙәгенә юлландылар.

Бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйған юлына, тиҙәрме әле? Әгәр ҙә шулай тип әйтергә яраһа, Алик өсөн был көн бик уңышлы булды. Бәлки, осраҡлы, бәлки, осраҡлы ла түгелдер, Ирек йәшәгән йорт эргәһенән үткәндә, ҡатып ҡалды. Эйе, ҡасандыр уны тишек кәмәгә ултыртҡан егет йоратынан нисек үс алырға белмәй йонсой ине, һәм бына иҫке һары "Лада" ҡул һуҙыр ерҙә ултыра. Егет күҙен оҙаҡ ваҡыт иҫке машинанан ала алманы. Нимә эшләргә, тәҙрәһен булһа ла ватып китергәме әллә? Әҙерәк үс ҡаныр. Шулай ҙа абай булыу кәрәк, хужалары ҡай тирәлә һәм автомобилде ҡарауыллаусы юҡмы? Алик тирә-йүнде байҡаштырҙы. Һис ниндәй әҙәм заты күренмәй. Бына бер малай подъездан сыҡты, ҡыйыу атлап, "Лада"ға инеп ултырҙы. Бүтән берәү ҙә күҙгә салынманы. Малай руль артында туйғансы уйнағас, сығып, машина ишеген бикләне. Тимәк, был иҫке автомобилдә берәүҙең дә эше юҡ. Бик яҡшы! Алик подъезға етеп килгән баланың эргәһенән бәреп тигәндәй үтеп китте. Малай ергә ҡоланым тигәндә генә, артына әйләнә һалып, тегене тотоп өлгөрҙө.

- Тирә-йүнде абайлап йөрөргә кәрәк, еүеш морон! - тине һәм ары атлап китте. "Үҙе килеп бәрелде лә, мине ғәйепле итмәксе", - Сөләймән ҡолғаға аптырап ҡарап торҙо ла, асыу менән ҡул һелтәп, подъезға инеп китте.

Малайҙың кеҫәһенән автомобиль асҡысын эләктергән Алик өй мөйөшөнә боҫто, "еүеш морон" күҙҙән юғалыу менән, машинаға табан атланы. Ишеген йәһәт кенә асып, тоҡандырҙы һәм, ай күрҙе - ҡояш алды, ҡуҙғалып та китте. Хәленән килгәнсә иҫке машинаны ҡыуҙы ғына - нисек тә был тирәнән тиҙерәк эҙ юйырға!

Артҡы ултырғыста ятҡан Риана машина ҡаты итеп һиңкегәндән уянып китте. Һөйөклө ире менән күрешергә китеп барыуы шундуҡ иҫенә төштө. Сараның "Лада"ны тегеләй-былай болғап алып барыуына аптырап, ятҡан еренән тороп ултырҙы һәм үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Йөрөтмән... Эйе-эйе, был оҙон егетте ул ҡайҙа күрһә лә таный! Риана оҙаҡ уйлап торманы, бар көсө менән тырнаҡтарын Аликтың битенә батырҙы.

- Сволочь! Ҡайҙа урлап алып китеп бараһың мине?

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙең шәлдәр йылылығы, йомшаҡлығы, оҙаҡҡа етеүе, йылдар үткән һайын бешеләнеп, тағы ла нығыраҡ йылы булыуы һәм һоро төҫө менән айырыла. Быны бөтә төбәк шәлселәре лә яҡшы белә.*



ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**Башҡорт халҡының сигеү, ҡорама ҡорау, бәйләм бәйләү, кейеҙ баҫыу, матур-матур кейемдәр тегеү, биҙәүестәр яһау кеүек ҡул эштәре традицияларын дауам иткән, шуның менән рухи мираҫыбыҙҙың юғалыуына юл ҡуймаған оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бик күп Башҡортостанда. Улар әсәй-өләсәйҙәребеҙ тәжрибәһен үҫтереп, дауам итеп кенә ҡалмай, ә юғары кимәлдәге оҫталыҡтарын күрһәтеп, төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, призлы урындар яулай, халҡыбыҙҙың онотолоп барған кәсептәрен бөтә республикаға, илгә, донъяға таныта. Мәләүез ҡалаһында йәшәгән Гөлсимә ИҪӘНҒОЛОВА - шундайҙарҙың береһе. Уның исеме Башҡортостандың шәл бәйләү оҫталары араһында яҡшы таныш. 2017 йылдан алып республика конкурстарында ҡатнаша. Тәүгә ҡатнашҡан йылда уҡ ул конкурстың төп призын яулаш. Унан һуңғы йылдарҙа ла һәр саҡ уға уңыш йылмайҙы: 2018 йылда "Селтәрле шәл" номинацияһында - беренсе урын алды, 2019 йылда "Шәл бәйләү традицияларын һаҡлағаны өсөн" номинацияһында билдәләнде. Былтыр иһә уның селтәр шәлдәре тағы ла Гран-приға лайыҡ булды. Ошонда урынлы һорау тыуа: конкурс ҡына билдәле иттеме уны? Эйе, был тәңгәлдә, һис шикһеҙ, уның да роле баһалап бөткөһөҙ. Шул уҡ ваҡытта был конкурсҡа Гөлсимә үҙе оҫталыҡтың иң үренә еттем тигән фекергә килгәс кенә барыуын да йәшермәй. Әйҙәгеҙ әле, бөгөн беҙ оҫтаның серле лә, бай ҙа күңел донъяһына сәйәхәт ҡылып, уның шәл бәйләү нескәлектәре менән танышайыҡ.**

# КӘЗӘ АҪРАҒАН, ШӘЛ БӘЙЛӘГӘН...

## мохтажлыҡта йәшәмәҫ

### Юрауҙары юш килә

Гөлсимә Иҫәнғолова сығышы менән Федоровка районы Бала Сытырман ауылы ҡыҙы. Бәләкәйҙән шәл бәйләү кеүек, уны шал да, үәл дә тиҙәр, ижади эштең һауаһын һулап, был шөғөлдең бөтә ауырлығын һәм нескәлеген үҙ күҙҙәре менән күреп үҫә. Биш-алты йәш булғанда уҡ ауылдаштары уның отҡорлоғон, бармаҡтары тилберлеген күреп, тиҙҙән уның бик оҫта шәл бәйләүсе буласағын юрай. Ысынлап та, юрағандары юш килә уларҙың - ҡыҙ башланғыс класта уҡығанда уҡ ололар менән бер рәттән ултырып шәл ситтәре бәйләй башлай. Әсәһе иләп өлгөртмәһә, күрше-тирәлә йәшәгән апай-инәйҙәргә бәйләшеп, аҡса эшләргә лә форсат таба. Был шөғөлгә ҡыҙыҡһыныуы, теләге шул тиклем ҙур була, кис ултырырға йәки ҡул эше өмәһенә ингән ололарға ҡарап, был шөғөлдөң айышына үҙаллы төшөнә ҡыҙ. Дебетте матур итеп аяларға ла, иләргә лә тап ошондай ҡуламаш эш башҡарғанда өйрәнә. "Беҙ үҫкәндә бөтә ауыл шәл бәйләй ине. Бер көн - бер өйҙә, икенсеһендә икенсе өйҙә өмә менән кәзә мамығын эшкәртә торғайнылар. Уны яңғыҙың да эш итергә мөмкин, әлбиттә, әммә күмәкләп эшләһәң тиҙ ҙә, күңелле лә. Шәлдең матурлығы уның биҙәктәрен генә бәйле түгел. Уны бәйләп башҡа ябынғансы бик оҙайлы һәм яуаплы эш талап ителәә ине. Дебеттең матурлығы кәзәнең нисек ашауына, тәрбиәләнеүенә, тарапмы-ҡырҡыпмы алыныуына ла ҡарай. Йыуып киптерелгән дебетте тәүҙә төйөрөн ҡалдырмай ғына күпертеп аялайның йәки шапылдатаһың. Иләп ҡатлағас, сиратаһың. Был эштәрҙең барыһы ла өмә ваҡытында бер-беренде мактау, хуплау, дәртләндереү һүҙҙәре менән үтә. Кемдеке матурыраҡ килеп сыға, унан өйрәнергә, уға тиңләшергә, уныҡына оҡшатырға тырышаһың. Юғиһә, иләнгән еп тигеҙһеҙ килеп сыға. Төрләсә булғас, шәл дә матур булмаясаҡ, шуға күрә иләүгә айырым оҫталыҡ талап ителә ине", - ти Гөлсимә Фәнил ҡыҙы үҙенең алыҫта ҡалған бала саҡ хәтирәләренә бирелеп.

Шәл бәйләү оҫталығы уға өләсәһенән күскән. Мәрхәбә Фәйнетдин ҡыҙы Тимербаеваны ла заманында Стәрлебаш, Федоровка яҡтарында оҫта шәлсе, тип белгәндәр. Дебетен ҡырҡлы еп ҡалынлығында тигеҙ генә итеп иләп, нәҙек кенә энә менән бәйләгән. Иләп бара, ҡулы аҫтында мамығы ҡабарып бара, тип әйтәләр ундайҙар хаҡында. Бөтә оҫталар кеүек һан артынан ҡыумаған, йылына матур итеп өс-дүрт шәл бәйләһә, шуға ҡәнәғәт булған. Шәл бәйләү оҫталығына ҡыҙҙарын, аҙаҡ ейәнсәрҙәрен өйрәткән.

Гөлсимә Фәнил ҡыҙының шәл бәйләү оҫтаһы булып китеүенә тағы дүртенсе класта уҡығанда булған ваҡиға ла үҙ өлөшөн индергәндер. Уҡытыусыһы Рәйфә Вәлиева уҡыусыларына ҡул эше алып килергә ҡушҡас, ҡыҙ бөтә күңелен һалып, семәрләп-биҙәкләп ҡурсаҡ шәле бәйләп алып бара. Уның



эшен мәктәптә бик оҡшаталар, хатта ки район күргәҙмәһенә алып баралар. Унда Гөлсимәнең ижад емеше беренсе урын яулай. Ошо бәләкәй генә еңеүе уның ижад ҡомарын, сәмен уята - шәл бәйләү эшенә тағы ла илһамланыбыраҡ, дәртләнеберәк тотонорға этәргес була. Ғөмүмән, был шөғөлдән бер ҡасан да ташламай ул. Өфөлә медицина училищеһында уҡығанда ла, уны тамамлап, дауаханала медсестра булып эшләгәндә лә ҡул эше һәр ваҡыт эргәһендә була.

### Һөнәрле булыу - гәүһәрле булыу

Был хәҡиҡәткә күп тапҡырҙар инанған инде Гөлсимә. Туҡһанынсы йылдар башында-уртаһында бөтә ил финанс көрсөгөнә терәлеп, эш хаҡы ярытышар йылға тиклем тотҡарланған йәки әйберләтә йә аҙыҡ-түлек магазинына талон менән бирелгән осорҙа яратҡан шөғөлө кәсепкә әйләнеп китә һәм ҙур ярҙам була. Тап ошо шәл бәйләй белеү һәләте арҡаһында башҡалар кеүек йылдар буйы ҡулаҡсаһыҙ ултырмай Иҫәнғоловтар ғаиләһе.

- Өләсәйем, әсәйем менән бергә бәйләгән шәлдәрҙе бергә ҡушһаҡ, Ер шарын урап сығырға булыр ине, моғайын. Йылына 30-40-шар шәл бәйләгән ваҡыттар булды бит. Былар, билдәле инде, барыһы ла йөкө иҫәбенә эшләнде, - ти Гөлсимә.

Әле лә ҡул эшенә күберәк тәнгә мәлдә ултыра. Барыһы ла йоҡларға ятып, һиллек урынлашҡас, ҡулына ала ул бәйләмен. Илаһи тынлыҡта иң матур биҙәктәрен һала ул шәл ситтәренә. Яратҡан шөғөлө уға рухи таяныс кеүек. Ауырыған ваҡытында яңы һулыш өрә, ҡайғыһын тарҡата, шатлығын ишәйтә. Шуға ла үҙ асылын таба алмай, бәргеләнеп-һуҡҡыланып йөрөгәндәргә яратҡан шөғөл табырға, айырыуса ҡул эше эшләргә, бәйләргә кәңәш итә оҫта: "Был бик мөһим", - тип иҫәпләй ул, сөнки үҙ булмышын тапҡандар ғына оло маҡсат ҡуйып йәшәй ала, тормоштоң ваҡ мәшәҡәттәренән, ығы-зығыһынан өҫтөн була.

### Йоланы һаҡлау кәрәк

Иң оҫта кеше генә шәлдең уртаһы менән ситен бергә бәйләй тигәндәрен ишеткәнем бар. Әммә Гөлсимә Иҫәнғолова был фекергә хупламай, улай ғына ла түгел, ул быға ҡырҡа ҡаршы: "Быны мин башҡорт шәле технологияһын боҙоу, тип уйлайым. Шәлъяулыҡ борон-борондан биш элементтан торған: бер урта, дүрт сит. Уны әсәйҙәребеҙ ҙә, өләсәйҙәребеҙ ҙә айырым бәйләгән һәм бәйләп бөткәс кенә дүрт эргәһен уртаға тоташтырған. Шәлдең был этабы ла яуаплылыҡ, оҫталыҡ талап итә. Дүрткел булғанда ғына ул матур һәм оҫта итеп бәйләнгән тип иҫәпләнә. Һуңғы осорҙа баҙарҙа Интернеттан тәҡдим ителгән өлгөләр ҡулланылған төрлө биҙәкле шәлдәр, үәлдәр осрай башланы. Быны ла мин традицион технологиянан ситкә тайпылыу, тип ҡабул итәм, сөнки беҙҙең үҙебеҙҙең быуаттар төпкөләнән килгән "бесәй табаны", "һалма", "шыршы", "тау-биҙәк" тип аталған нағыштарыбыҙ бар. Ошо биҙәктәрҙән тыш, мин йәнә үҙем уйлап тапҡан һәм "кауыша алмаған йәрҙәр" тип атаған семәрҙе яратам. Республика конкурсын ойоштороусыларҙың тап ошо нескәлектәргә иғтибар итеүен айырыуса хуплайым", - ти ул.

### "Башҡорт шәле" бренды

"Рәсми рәүештә нығытылмаһа ла, башҡорт шәленең бренды күптән бар һәм уны Рәсәйҙә меңәрләгән шәлъяулыҡ араһында ла танырға мөмкин. Оҙаҡ йылдар шәл баҙарында булыуым менән шуны әйтә алам: беҙҙең шәлдәр йылылығы, йомшаҡлығы, оҙаҡҡа етеүе, йылдар үткән һайын бешеләнеп, тағы ла нығыраҡ йылы булыуы һәм һоро төҫө менән айырыла. Быны бөтә төбәк шәлселәре лә яҡшы белә. Башҡортостан ерлегендәге кәзә дебетенән бәйләнгән шәл оҡшаһа, йыш ҡына уның хаҡына ҡарап тормайҙар, һатыулашмай ғына башлыса үҙенә, яҡын кешеһенә, буласаҡ киленең бүләккә генә алалар. Алыпһатарҙар иһә күпселек осраҡта арттырып һатыр өсөн йылҡылдап торған Волгоград мамығынан бәйләнгәненә өҫтөнлөк бирә. Мин дебетте Ейәнсура яғына барып, ҡулда шыуып торғанын, бөтәрләнмәгәнен үҙем һайлап алам. Волгоградтыҡы кеүек йылҡылдап тормай, әммә башҡорт тоҡомло кәзәнеке йылы һаҡлай, дауалау көсө лә бар.

Йәмғиәттә башҡорт дебет шәленә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, "Башҡорт дебет шәле" брендын булдырыу, халыҡ оҫталарының һөнәри кимәлен үҫтереү, тәжрибә уртаҡлашыу, эшлекле бәйләнеш булдырыу йәһәтенән конкурстар ойошторолоуы бик тә отошло тип уйлайым", - ти мәкәләбеҙ геройы.

Гөлсимә Иҫәнғолова шулай уҡ башҡорт шәленең киләсәген башҡорт тоҡомло кәзәләрҙе үрсетеүгә бәйләй. Хрущев заманынан ҡалған "Кәзә мал түгел" тигән әйтем төптө дөрөҫ түгел, тип иҫәпләй. Ысынлап та, заманында тап ошо дебет шәл бәйләп һатып, күпме кеше балаһын уҡытты, кейендерҙе, өйләндерҙе, йорт һалды. Хәҙер көлкө һымаҡ булып күренһә лә, был ысынбарлыҡҡа тура килә. "Кәзә һауғандан һыйыр һауған һөт һорап килгән" тигән әйтем дә бар бит халҡыбыҙҙа. Был, әлбиттә, шартлыса әйтелгән. Шулай ҙа кәзә аҫраған мохтажлыҡта йәшәмәҫ тигәнде туранан-тура аңлата ул. Ә Гөлсимә Иҫәнғолова кеүек мамыҡты ебәккә әйләндерә белгән оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ булғанда, башҡорт шәленең даны оҙаҡ йылдарға етер әле...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН

# МАЙЛЫ АҘЫҠ АШАМА

■ Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтереүсе төп сәбәптәрҙең береһе булып юғары холестерин тора. Етмәһә, бөгөн был ауырыуҙар йәшәрә һәм 52 процент осраҡта ваҡытынан алда үлемгә йәки инвалидлыҡҡа килтерә. Статистика буйынса, 30-50 йәштәге ир-егеттәрҙең холестерин кимәле күпкә юғарыраҡ, был инде миокард инфарктына тура юл. Майлы кислоталар организмда барлыҡҡа килмәй, шуға ла дөрөҫ туҡланыу кәрәк. Аҡ майҙа, иттең майында булған ауыр майҙар организмға файҙа килтермәй.

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүеге майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сэндвичтар яһаған. Сэндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауы ғалимдарҙы ла аптыраткан. Хәҙер улар ҡоро аҙыҡтарҙың бар төрҙәрен дә тикшереп ҡарарға йыйына.

■ Ғалимдар раҫлауынса, уңыштың 20 проценты ғына кешенең аҡылынан тора. IQ термины менән бер рәттән хәҙер EQ - эмоциональ интеллект тигән термин барлыҡҡа килде. Бына фекерләү һәләтенән тап ошо төрө беҙҙең уңышлы булыу-булмауыбыҙға яуаплы икән. Һүҙ кешенең үҙ хис-тойғолары менән идара итеү, позитив була һәм маҡсаттар ҡуя белеү һәләте тураһында. Тимәк, логик фекерләй алыу һәм белем булыу ғына кешегә уңыш алып килмәй. Эмоциональ интеллект түбән булһа, психосоматик ауырыуҙар барлыҡҡа килеү хәүефе арта.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүен асыҡлаған.

■ Оҙаҡ йоҡлаһаң, баш мейеһе әүҙемлеге түбәнәйә. Шуға ла оҙаҡ йоҡлау сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерә ғалимдар. Һынауҙарҙа 45 йәштән өлкән 230 кеше ҡатнашҡан. Тәүлегенә 9 сәғәт йоҡлаған һәм етмәһә, аҙ хәрәкәтләнгән кешеләрҙең организмы тәмәке тартыу йә араҡы эсеүҙән күргән зыянға тиң, имеш. Бындай йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында иртә үлем хәүефе 4 тапҡырға юғары. Ә баш мейеһенең әүҙемлеге түбәнәйеүе депрессияға килтереүе ихтимал икән. Тәүлегенә 11 сәғәтҡә тиклем йоҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфалана.

ҺАБАҠТАР

# ҺИҘМӘЙ ҘӘ ҠАЛДЫ...

## "йәшел йылан" тырнағына эләккәнен

**Был апайҙың һөйләгәндәре бик ныҡ уйландырҙы мине. Ул үҙ хәбәрен: "Бәлки, кемдер был хәлдән һабаҡ алыр", - тип тамамлап ҡуйғайны. Уның һөйләгәндәрен тыңлайыҡ әле.**



Уйламағанда-көтмәгәндә ағайымдың донъяһына бәлә килде - ҡапыл ғына еңгәм хәмер ҡолона әйләнде лә ҡуйҙы. Аптырамалы инде, элек ауыҙына ла ҡабып ҡарамаған еңгәм бына хәҙер айнымай эсә. Шуныһы аянысы, беҙ уның был "йәшел йылан" ҡапҡанына эләгеүен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Беҙ, тигәнем, ағайымдың туғандары инде. Беҙ ғаиләлә дүрт бала үҫтек. Ағайымдан ҡала мин, шунан тағы ике ҡустым бар. Бөгөн барыбыҙ ҙа матур итеп донъя көтәбеҙ. Барыбыҙҙың да үҙ ғаиләләре бар. Һәр кемдең үҙ донъяһы, һәр кемдең үҙ мәшәҡәте, тигәндәй. Төрлөбәҙ төрлө ерҙә донъя көтә. Әйтергә лә түгел, һирәгерәк осрашабыҙ шул. Йылына бер-ике тапҡыр ғына оло байрамдарҙа күрешәбеҙ. Ә башҡа ваҡытта күберәген телефон аша ғына хәл белешәбеҙ. Унда ла урыҡ-һурыҡ, өҫтән-мөҫтән генә. Хәҙер күптәр шулай донъя көтә бит. Нишләйһең, заманаһы шулай. Ҡыҫҡаһы, һәр кем үҙ тормошоноң ығы-зығыһында ҡайнаған, ағайымдар матур йәшәй икән, тип уйлап тик йөрөгән...

Әле аптырайым. Нишләп мин аратирә килеп торған сәләмдәргә иғтибар итмәнем икән? Үҙегеҙ беләһегеҙ, насар хәбәр атлап-йүгереп түгел, ә осоп йөрөй. Килмәне түгел, килде бит инде ундай сәләмдәр. Хәтта минең үҙемде урамда осратып: "Еңгәңдең хәле шулайыраҡ бит әле, әрәм булып йөрөй, берәй сараһын нишләп күрмәйһегеҙ?"- тип әйтеп китеүселәр ҙә булды. Әммә мин бындай хәбәрҙәргә, буш һүҙ, кеше нимә генә һөйләмәҫ, тиген кеүегерәк ҡараным. Ысын күңелдән әйтәләр, тип уйламаным. Матур донъя көткәндәренә көнләшәләр, беҙҙе талаштырыр өсөн шулай ҡыланалар, тип үҙемде тынысландырған булдым. Бәҡтиһән, гонаһ алып йөрөгәнмен, ул кешеләр ысын күңелдән әйткән булған икән. Ә бына ағайымдың йомола төшөүенә, төрлө һылтау табып ҡунаҡтарға барырға тырышмауына, ваҡыты менән телефонды алмауына, һөйләшкән хәлдә лә ҡырыҫыраҡ яуап биреүенә бер аҙ иғтибар итергә кәрәк булғандыр...

Ә шулай ҙа бер көн барыһы ла асыҡланды. Ул көндө ағайым беҙҙе йыйып алды һәм шаҡ ҡатырлыҡ хәбәр һалды: "Туғандар, түҙерлек хәл ҡалманы, еңгәгеҙ эсә!" Мин аптырап ҡалдым... тип әйтеү бер аҙ алдашыу булыр ине. Унан бигерәк, үҙенде-үҙең алдаған һымағыраҡ килеп сығыр ине. Белмәнем түгел, белдем бит инде. Бары күрмәмеш тә белмәмеш булып йөрөгән булдым. Әммә эштең былай уҡ тәрәнгә киткәнен аңламағанмын шул. Еңгәм ҡунаҡ-фәләндә генә бер аҙ байрам итеп алалыр, тип уйланым. Бәҡтиһән, ул был боҙоҡ эште башҡалар һымаҡ артыҡ оҙаҡҡа һуҙып тормаған, ни бары йыл самаһы эсендә тәҙтеп ала алмаҫлыҡ хәмер ҡолона әйләнгән. Бындай ауыһыҙ әсе хәҡиҡәтте белгәс, беҙ ысынлап та аптырап ҡалдыҡ. Ағайымдың буштан-бушҡа беҙҙе йыймағанын, бындай ауыр һүҙҙәрҙе бушҡа әйтмәгәнен ултыра биргәс кенә аңлай төшәбеҙ. Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлаша. Иплән кенә ағайыма күҙ һалам. Ул өнһөҙ ҡараштарын тәҙрәгә төбәп ҡатып ҡалған. Ҡараштарымды еңгәйемә күсерәм. Уныһы башын түбән эйгән һәм ике усы менән битен ҡаплап, шым ғына илай. Ирекһеҙҙән, балаларға күҙ һалам. Береһенән береһе бәләкәй биш бала мөлдөрәшеп-аптырашып ҡарап ултыра. Һөйләп тормаһам да аңлашылалыр, был бик ауыр күренеш. Ауыр тын алып, ағайым әйтеп ҡуя: "Бына шулай, туғандар, өйҙөң ҡото китте, балалар аслы-туҡлы йөрөй башланы, ҡыҫҡаһы, нимәлер эшләр кәрәк..."

Ә нимә эшләргә кәрәк? Беҙ нисек ярҙам итә алабыҙ? Бына ошо һорауҙарға яуап табыуҙары ауыр. Еңгәмде әйтәм, бәләкәй бала түгел. Ул бөтәһен дә аңлай. Шуға ҡаршы ла яуап бирмәй. Беҙҙең һәр бер әйткән һүҙгә баш ҡағып, ризалашып илап тик ултыра. Бар белгәнебеҙҙе әйттек инде былай. Башҡа нимә эшәйһең инде. Күңелһеҙ генә таралыштыҡ. Ағайым беҙҙе моңһоу ғына оҙатып ҡалды...

Ҡайтыуын ҡайттым, ә ауыр уйҙар баштан сыҡмай. Нимәлер эшләргә кәрәк икәнен аңлайым. Ә анаҡ ҡына нимә эшләргә һуң? Бына шуны аңлап булмай. Ә яуапты әйтәм, эргәлә генә торған һымаҡ. Әйҙә, әҙ генә уйла, зиһенеңде эшләт, яуапты таба яҙып ҡына тораһың бит, тип кемдер әйткән һымаҡ. Еңгәмде әйтәм, ул бит элек улай булманы. Донъяһын матур итеп көттө, балаларын яратып туя алманы, ҡайным-ҡәйнәм, бикәс-ҡәйнеш тип өҙөлөп торҙо. Ҡапылдан ғына кеше улай ҡырҡа үҙгәрә алмай ҙа инде. Һис юғында, үҙ теләге менән! Бына ошо хәл мине ныҡ аптырата. Көнөн дә уйлайым, төнөн дә уйлайым. Ваҡыт үтә, ә нииндәйҙер яуап таба алмайым. Бер көн атлап барған ерҙән ҡапыл ҡатып ҡалдым - ысынлап та, кеше бит ҡапыл ғына үҙ теләге менән үҙгәрә алмай! Үҙ аҡылында булған кеше бындай тиҙлектә кирегә тәгәрәй алмай! Бар яуап тап ошо һүҙҙәр эсендә ята түгелме һуң! Уйҙарым таралып китмәһен, тигәндәй, башымды ике усым менән ҡыҫып ҡосаҡлайым. Елкеләп киткән күңел бер аҙ тыныслана төшкәс, Аллаға шөкөр, дөрөҫ яуапты таптым, буғай, тип уйлап ҡуям. Әгәр минең фараз дөрөҫ булһа, еңгәм бит кемдәндер шауҡымында йөрөй! Әллә сихырланылар микән уны? Аллам һаҡлаһын, булмаҫ тимә, хәҙер кеше яман бит. Әгәр эш былай торһа, еңгәмде больница-фәләнгә алып барыуҙан файҙа юҡ. Уны берәй муллаға алып барырға кәрәк!

Ошо ерҙә кәмә тағы ҡомға терәлә: ә мулланы ҡайҙан табырға? Ул заманда илдә үҙгәртеп ҡороуҙарҙың киң ҡолас алған мәле ине. Ҡапыл-ғара белеме булған дин әһелен табыуы ауыр. Намаҙураҙаларҙы кеше йәшереп кенә башҡарҙы. Ә шулай ҙа мин күрше районда бер һәйбәт мулла барлығын ишетеп кенә белә инем. Әллә ҡунаҡта ишеттем, әллә урамда ишеттем инде. Хәҙер анаҡ ҡына әйтә алмайым. Әммә белә инем. Хәҙер бар ниәтем - нисек булһа ла шул муллаға еңгәмде алып барып күрһәтеү.

Иртәгеһенә үк бар эшемде ташлап, ирем менән ағайымдарға юл тоттоҡ. Хәл-әхүәл һорашҡас, ниәтебеҙҙе еткерҙек. Еңгәм ҡарышыр микән, тигән шикләнеүҙәр бар ине. Бындай ваҡытта бит күптәр, нимә, мин һеҙгә бөткән берәй әскесеме әллә, тип үҙеңә тауҙай була ла китә бит. Ярай әле еңгәм улайтманы, шунда уҡ башын һелкеп кенә үҙ ризалығын бирҙе. Ағайым, үҙегеҙ ҡарағыҙ инде, артыҡ өмөт юҡ, тип ризаһыҙ ғына башын ҡағып ҡуйҙы. Ирем, муллаға күрһәтергә кәрәк, ҡайнаға, шайтан һәйбәт өмөтһөҙ, тип минең ниәтте хупланы. Эште яп-яҫыға, оҙон-оҙаҡҡа һуҙып торманыҡ. Шул уҡ көндө еңгәмде үҙебеҙгә алып ҡайттыҡ. Ә икенсе көн таң менән күрше районға сығып та киттек. Әле ҡыуанам, ярай әле тимерҙе эҫе мәлендә һуғып өлгөргәнбеҙ...

Ҡояш апаруҡ күтәрелгән мәлдә беҙ тәғәйен ауылға барып та еттек. Кеше күп булыр микән, бөгөн күренеп ҡайта алырбыҙ микән, тигән уйҙар бушҡа булып сыҡты. Элек бит (улай тиһәң, хәҙер ҙә шулай инде) кеше мулла-күрәҙәсегә күп йөрөнө. Ауырыһаны ла йөрөнө, ҡыҙыҡ күреп йөрөгәндәре лә булды. Ә бөгөн, аптырамалы инде, берәү ҙә юҡ. Хәтта күңелгә бер аҙ ҡыйын булып китте. Һәйбәт мулла тигәндәре әллә шаярттыу булды инде. Ҡыйыуһыҙ ғына урам эсенә үтәбеҙ. Бына һинә мә, өй ишегендә ҙур йоҙаҡ тора. Эх, күпме өмөттәр менән килеүебеҙ бушҡа булып сыҡты, буғай. Шулай ҙа ҡапыл ғына кире боролоп сығып китке килмәй. Аптырашып, бер урында тапанып тора бирәбеҙ. Шул саҡ һарай яғынан йүткергән тауыш ишетелде. Бошонҡо ғына тауыш килгән яҡҡа баштарҙы борабыҙ. "Әйә, һаумыһығыҙ. Бесәнгә тип әҙерләнеп йөрөй инек. Өлкән улды көтөп, бер аҙ һуңлап кителде. Әле тырманы алам, тип сығып килгән мәлдә һеҙҙе күреп ҡалдым", - тип һөйләнә-һөйләнә бер ир кеше беҙҙән яҡҡа ынғайлап килә ята ине. Ул минең ирем менән ҡуш ҡуллап күреште.

Беҙгә итәғәтле генә башын ҡағып ҡуйҙы. Ҡарап торам, хужа әллә ни оло күренмәй. Алтмыш йәше тулмағандыр, моғайын. Кеше һөйләгән мулла ошо микән? Шул арала ул эстән генә ниҙер уҡып, битен һыйпап ҡуйҙы. "Аяҡта дөрөҫлөк юҡ, ултырайыҡ", - тип эргәләге эскәмйәгә күрһәтте.

Бер аҙ тын ултыра биргәс: "Һеңлекәште сихырлағандар бит", - тип әйтеп ҡуйҙы. Бына ғиллә, һорашыу юҡ, төпсөнөү юҡ, ҡайҙан-нисек беләләр инде. "Әҙ генә иртәрәк алып килергә кәрәк булған. Әҙерәк һуңлағанһығыҙ. Шулай ҙа өмөт бар. Ҡотолоу юлы тик үҙенән тора. Ә хәҙер ҡайтығыҙ. Теүәл бер аҙнанан килерһегеҙ. Алты йомортҡа алып килегеҙ. Уларҙы магазиндан һатып алмағыҙ. Ауылда йәшәйһегеҙ бит, ауыл тауыҡтары һалған йомортҡалар булһын", - тине. Аллаға шөкөр, тип йылмайып ебәрҙем мин. Нисек ҡыуанмайһың инде, ана бит, өмөт бар, тип тора. Былай булғас, ҡотҡарабыҙ еңгәмде! Ә бына "Ҡотолоу юлы тик үҙенән тора", тигәне бер ҡолаҡтан инде, икенсеһенән сығып та китте. Аҙаҡ, өйгә ҡайтҡас ҡына, уйланып йөрөнөм был турала. Бөгөн беҙҙең өсөн иң мөһиме - өмөт бар! Шул арала хужа эстән генә ниҙер уҡып битен һыйпап ҡуйҙы. "Онотоп ҡуймағыҙ, алты метр аҡ тауар алып килегеҙ. Боронғо күҙлекәй аҡ таҫтамал булһа, бигерәк һәйбәт. Ә хәҙер мин бесәнгә барайым инде. Һау булығыҙ", - тип һаубуллашып, һарай яғына китеп тә барҙы. Беҙ урамға сығып, машина эргәһенә килдек. Ә хужа үҙ ғаиләһе менән картуф баҡсаһы яғынан сығып, ике арба булып тейәлешеп, эргәләге тауға табан юл тоттолар. Беҙ уларҙың тауға менеп киткәнен оҙаҡ ҡарап торҙоҡ...

Теүәл бер аҙнанан беҙ тағы уларҙың өйө алдында инек. "Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, килеп дөрөҫ эшләнегеҙ, һеңлекәштең хәле көндән-көн мөшкөлләнеп бара", - тип ҡаршы алды ул беҙҙе. Ул еңгәмде алғараҡ ултыртты, беҙ арттараҡ урын алдыҡ. Үҙ алдына оҙаҡ итеп доға уҡыны хужа. Шунан беҙгә борола биреп, ошоларҙы һөйләне:

- Һеңлекәшкә боҙомдо араҡыға ҡушып биргәндәр. Был мәлдә кеше күмәк булған. Ниндәйҙер өмә булғанға ла оҡшай. Шунда һеңлекәшкә көсләп араҡы эсергәндәр. Ниндәйҙер бер ҡатын, минең ҡулымдан эс, тип өҙмәгән дә ҡуймаған. Һеңлекәш ҡырҡа баш тартҡан. Әммә теге насар уйлы ҡатын ныҡышҡан да ныҡышҡан. Кемдер һауытты өҫтәл аша алып бирергә уйлаған. Әммә уныһы, юҡ, минең ҡулымдан ғына эсһен, тип оҙон өҫтәлде урап үтеп, һеңлекәштең эргәһенә үк килеп баҫҡан. Хатта уға бағышлап йыр йырлаған. Һеңлекәш бындай әрһеҙ ҡыҫтауға бирешкән һәм бер генә уртлап, кире бирергә мәжбүр булған. Боҙом бына шунан башланып киткән дә инде. Ә һеңлекәштең бөгөн дә бөтөнләй эскеһе килмәй, ә эстән шул боҙом ҡотортоп тик тора. Етмәһә, көндән-көн көсәйә бара. Шуға ул ошондай ауыр хәлгә төшкән. Ваҡыт күп үткән, боҙом ныҡ үҫешеп өлгөргән. Бөгөн мин уның көслө өлөшөн генә ала алам. Ә таралып киткәндәре менән һеңлекәшкә үҙенә көрәшергә тура килер...

"Бына бит, әй, ниндәй яуыз кешеләр бар беҙҙең арала. Ҡайтайым ғына әле. Барыбер табам мин ул әҙәм аҡтығын. Күрмәгәнен күрһәтәм мин уның. Бына тигән еңгәмде әрәм итә яҙған, башы ҡороғор..." Хужа, әйтерһең, минең уйҙарҙы ишетеп ултыра.

- Боҙоҡ кешене эҙләп маташмағыҙ. Ундайҙар һәр саҡ буласаҡ. Үҙегеҙ аң булығыҙ, үҙегеҙ һаҡ булығыҙ. Бөгөн, иң мөһиме, һеңлекәште ҡотҡарыу тураһында уйлар кәрәк...

Шунан хужа алдына таҫтамал йәйеп һала һәм уҡына-уҡына уға йомортҡаларҙы төрә башлай. Ҡарап ултырабыҙ, һәр йомортҡаны айырым төрә. Был юлы үтә оҙаҡ уҡыны хужа. Бер мәл бөтәһен дә төрөп бөттө. Минә ҡалһа, ул йомортҡаларҙың ҡайһы берәүҙәре ҡуҙғала биреп ҡуйған һымаҡ булды. Бәлки, шулай ғына тойолғандыр. Ул мәлдә ишеткән һүҙҙәрҙән айнып бөтөлмәгәйне шул әле.

- Иншаллаһ, боҙомдоң көслө өлөшө хәҙер таҫтамал эсендә. Уны мин аҙаҡ үҙем юҡ итермен. Ҡалғаны, һеңлекәш, һинең үҙеңдән тора. Һиңә бөгөндән намаҙға баҫырға кәрәк. Әлбиттә, бөгөндән биш намаҙҙы үтәй алмаҫһың. Ә бына башҡарылғандары таралып өлгөргән боҙомға үҫергә-көсәйергә ирек бирмәҫ. Ә инде насип итеп, биш намаҙҙы башҡара башлаһаң, улар боҙомдо яйлап үлтерәсәк. Әле һеҙҙең ауылда дин юлына баҫҡан кешеләр һирәгерәк. Шуға күрә, ҡаршылыҡтар булыр, әлбиттә. Хатта мәле менән ҡайһы бер яҡындарың да һине аңламаҫ. Әммә һин үҙең ныҡ булһаң, һелекәш, Аллаһы Тәғәлә үҙ ярҙамынан ташламаҫ. Бына ошо дини китапты һиңә исемләп әҙерләп ҡуйғайным. Унда бөтәһе лә аңлатып яҙылған...

Бына ошо дин кешеһенә мин һаман рәхмәтлемен. Еңгәйем ҡотолдо бит ауырыуҙан. Дин кешеһе дөрөҫ әйткән, тәүҙә ҡаршылыҡтар апаруҡ булған. Быныһын еңгәм аҙаҡ миңә сер итеп кенә һөйләне. Тәү мәлдәрәк, тамаҡ әҙерләп мине көтөп ултырыу урынына намаҙ уҡыйһың да намаҙ уҡыйһың, тип ағайым да һуҡранғылаған. Балалар ҙа, үҙҙәренсә үсекләп, әсәләре ыңғайына бөксәнлегә сығып бер булғандар. Ауылда "Бахыр, берәү абыстай булып киткән, имеш", тип һөйләнеүселәр ҙә ишетелгеләгән. Әммә еңгәйем барыбер намаҙын ташламаған. Шуныһы ҡыуаныслы: тора-бара ағайым үҙе лә намаҙға баҫты. Аллаға шөкөр, бөгөн ағайым менән еңгәм биш балаларын матур итеп тәрбиәләп үҫтереп, башлыкүҙле итеп, ҡыуанышып бәхетле ҡартлыҡ кисереп ултыралар. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте киң. Әммә беҙ үҙебеҙ ҙә бәлә-ҡазаларҙан аң булайыҡ, һаҡ булайыҡ.

**Сәйҙә ҒАФАРОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺИН ТЕЛӘГӘНСӘ ГЕНӘМЕ?

Һинең үҙеңде кем тип иҫәпләүең мөһим түгел. Үҙеңде бик аҡыллы йәки төҙәлгеһеҙ ахмаҡ, үтә ябыҡ йәки сиктән тыш һимеҙ, тип иҫәпләй алаһың. Һинең агрессор йәки пацифист, эшсе йәки хеҙмәткәр, йорт хужабикәһе йәки эшлекле ҡатын-ҡыҙ булыуың мөмкин. Шаталаҡ йәки йомоҡ кеше булыуың да ихтимал. Эскесе, наркоман, алдаҡсы йәки юҡҡа-барға ҡыҙып барыусан булыуың мөмкин. Һәр ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, теләһә нимәнән ҡурҡып-өркөп, бөтә нәмәне күрә алмай йөрөүең дә ихтимал.

Ләкин һанап кителгәндәрҙән береһе лә һине шәхес булараҡ билдәләмәй. Былар барыһы ла һинең эшмәкәрлегеңде һәм тышҡы донъяға ҡарашыңды ғына һүрәтләү.

Әгәр һин үҙеңде үҙ ҡылыҡтарың, ғәмәлдәрең менән генә тиңләштерһәң, тимәк, һин үҙең тураһында яңылыш уйҙаһың. Был бер ниндәй нигеҙһеҙ үҙеңде ғәйепләйһең, сикләйһең һәм хатта шәхес булараҡ кире ҡағаһың, тигән һүҙ.

Үҙ-үҙеңә ышанмау - ул Аңлау проблемаһы ғына. Үҙ шәхесең тураһында дөрөҫлөккә төшөнгәс, һин үҙеңде аңлаясаҡһың, иң мөһиме, үҙеңде нисек бар, шулай яратырға һәм ҡабул итергә өйрәнәсәкһең.

Аңлауыңдың хәҙерге кимәле һинең кәйефеңде, тәртибеңде, эмоциональ реакцияңды, теләктәреңде, борсолоуҙарыңды, ҡурҡыуыңды, маҡсатыңды һәм ынтылыштарыңды билдәләй. Ләкин иң мөһиме - ул һинең үҙ дәрәжәңде тойоуыңды, икенсе төрлө әйткәндә, үҙең тураһында үҙ фекереңде билдәләй.

Аңлау һинең ысынбарлыҡ концепцияһын билдәләй. Аҡылың тормошоңдағы төп ваҡиғалар күренештәрен даими төшөрөп барыусы камераға оҡшаш. Ә һин фильм өсөн ҡайһыларын ҡалдырырға кәрәклеген хәл итеүсе. Даими төшөрә барып һәм төшөрөлгәнде туплап, һин был әйберҙәрҙе ысынбарлыҡ тип ҡабул итә башлайһың, сөнки иҫбатлау өсөн әҙер фотографияларҙы миҫалға килтерә алаһың. Тик хәҡиҡәт менән ысынбарлыҡ һәр ваҡыт тап килмәй. Әгәр аңың үҙең һәм башҡалар хаҡында ялған принциптарҙы, ҡиммәттәрҙе һәм инаныуҙарҙы үҙләштерһә, һиндә яңылыш Аңлау үҫешәсәк.

Ысынбарлыҡ бөтәһе өсөн дә бер төрлө. Әммә бер төрлө аңлаған ике кеше булмай. Үткәне, тормош тәжрибәһе һәм тормошто ҡабул итеү ысулы бер төрлө булған ике кеше булмай - уларҙың ҡиммәттәре, принциптары, инаныуҙары, ынтылыштары һәр ваҡыт айырыла.

Бер кем дә донъяны һиңә ҡулайлаштырыу өсөн генә үҙен үҙгәртергә тейеш түгел. Һин әйберҙәрҙе нисек бар - шулай итеп түгел, ә үҙең теләгәнсә күрергә теләп, ысынбарлыҡҡа ҡаршы киләһең. Бына шунан инде ғәйепләү башлана.

Башҡалар тураһында үҙеңдән сығып фекерләү манераһы кешеләр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе насарайта, аралашыуҙы өҙә лә инде. Шуға күрә үҙ-үҙеңде ыңғай баһалауҙы үҫтерергә теләһәң, башҡалар тураһында үҙеңә ҡарап фекерләүеңде туҡтат.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ЯҢЫ КИТАП

# БАЛАЛАРҒА




**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә мультимедиа ҡушымтаһы менән "Өс дуҫ" китабы донъя күрҙе. Башҡорт халыҡ әкиәте буйынса йыйынтыҡ башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә баҫылған.**

Китаптағы махсус QR-код ярҙамында Google Play һәм AppStore сервистарынан мобиль ҡоролмаға бушлай "Өс дуҫ" ҡушымтаһын күсереп алырға мөмкин. Уны асып һәм телде һайлап, смартфонды йыйынтыҡтағы һүрәттәргә йүнәлтергә кәрәк. "Әгәр бала күберәк ваҡытын гаджеттарҙа үткәрә икән, быны файҙалы итеп ойоштороп ҡарағыҙ. Беҙ кескәй дуҫтарыбыҙҙы киләсәк технологиялары менән ҡыҙыҡһындырырға булдыҡ. Уларҙың ҙур теләк менән ошо китапты ҡулдарына алып, эргәһенә телефон һалып, башҡорт әкиәтен уҡый һәм ҡарай башлауҙарын теләйбеҙ", - тип һөйләнеләр нәшриәттә. Балалар өсөн 3D форматындағы мультимедиа баҫмаһы тулыландырылған ысынбарлыҡты файҙаланыу иҫәбенә китап мөхитен тыуҙыра, баҫма биттәрҙе йәнләндерә. Мультимедиа контенты китаптың йөкмәткеһен мәғлүмәти байытырға, күргәҙмәле уҡытырға мөмкинлек бирә."Китап" нәшриәтендә ҡушымталы йыйынтыҡ тәүге тапҡыр ғына баҫылып сыҡмай. 2019 йылда "Хәйләкәр төлкө" әкиәте буйынса китап донъя күрҙе. Киләсәктә ошондай интерактив йыйынтыҡтарҙы йыл һайын нәшер итеү күҙаллана.

"Китап" нәшриәтендә шулай уҡ "Башҡортостандың күренекле шәхестәре" китаптар серияһын сығарыу башланды. Тәүгеләре Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабичтың тормош юлына һәм ижадына арналған. Китаптарҙы даими нәшер итеү күҙаллана. Был серияның геройҙары - яҙыусылар һәм шағирҙарҙан тыш, тарихи хәрбиҙәр, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре.

Ошо көндәрҙә "Китап" нәшриәтендә 112-се Башҡорт атлы дивизияһына бағышланған китап донъя күреүен дә хәтерегеҙгә төшөрөп китәбеҙ.

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# ҠАЙЫУЛЫ ОҘОН ҠУШАҠ... бота була

**Биштеғылыс** *(әй)* - бердо с пятью "зубьями" (для грубой пряжи)

**Бойотоу** *(ғәйнә)* - наклеить, приклеить, заклеить

**Бойра** *(һаҡмар)*, **илтер** - мерлушка, смушка

**Борғоса** *(ғәйнә, төньяҡ-көнбайыш, туҡ-соран, урта урал, һаҡмар)* - 1) пришва (вал в передней части ткацкого станка, на который наматывают сотканный материал по мере готовности) 2) *(ғәйнә)* **ҡалтырса** - сучило, скальница 3) закрутка

**Борғосағас** *(урта)*, **борғоса сөйө** *(дим)*, **борғоса таяғы** *(арғаяш, дим, ҡариҙел, урта)*, **тыйғыса** - притужальник (деталь домашнего ткацкого станка)

**Бором** *(ҡыҙыл)* - четыре навоя (в домашнем ткачестве)

**Бороу** *(мейәс)* - вышивание

**Сарыҡ бороу** - вышивание голеницы сарыка

**Борош** - перевитый, перекрученный

**Босҡаҡ** *(көнсығыш)* 1) мех с лап зверя 2) *(арғаяш)* **йорон** - лоскут шкуры 3) *(урта)* короткая шерсть 4) лоскут, клочок

**Бота** *(ғәйнә)* - вышитый длинный кушак

**Бөйөрлөк** *(мейәс)* - позумент с бахромой или монеты, нашитые сзади на зилян по обеим сторонам талии.

**Бөрләнтин** - 1) *(арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, урта, урта урал, һаҡмар)* - ситец с вафельным узором. **Бөрләдин** *(мейәс)* 2) *(урта)* сукно высшего сорта

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**



### 25 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45, 17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 5.00 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Брифинг по тарифам на мусор.**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Невероятное путешествие мистера Спивета". [6+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 26 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Цена Освобождения". К 100-летию Юрия Озерова. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Специальный репортаж. [12+]**
**13.50 Хоккей. "Амур" /Хабаровск/ - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**16.45 "Гора новостей".**
**17.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 По сути дела. [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Форт Росс: в поисках приключений". [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Счастье с неба".[12+]**
**5.00 Детей много не бывает. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 27 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Премьера сезона."Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Блокада. Дети". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
4.05 Т/с "Объект 11". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Д/ф "Никогда больше". [12+]**
**0.00 Х/ф "Совсем не простая история". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ғилмияза". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 28 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Иосиф Бродский. Часть речи". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.20 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.05 Т/с "Объект 11". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.45, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Чужие дети". [12+]**
**11.00 Послание Главы Республики Башкортостан Р.Ф. Хабирова Государственному Собранию - Курултаю Республики Башкортостан.**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Ҡурай даны. [12+]**
**13.50 Хоккей. "Амур" /Хабаровск/ - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**16.45 "Гора новостей".**
**17.00 Презентационный фильм БАШГАУ. [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [0+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любой день". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вишневая гора".[12+]**
**5.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

### 29 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.50 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.40 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Своя колея". Лучшее. [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Лорел Каньон". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Дом культуры и смеха. Скоро весна. [16+]
2.00 Х/ф "Братские узы". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Д/ф "Последний день". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Память сердца". [12+]**
**17.00 Д/ф "По старинным улочкам Уфы". [6+]**
**17.30, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Следы на воде". [16+]**
**2.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.00 Әлләсе... [12+]**
**4.45 Преград. Net. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

### 30 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Владимир Высоцкий. Письмо Уоррену Битти".[16+]
11.15, 12.15 Д/ф "Владимир Высоцкий. "Я не верю судьбе..." [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.40 Д/ф "Живой Высоцкий". [12+]
13.10 Д/ф "Высоцкий. "Где-то в чужой незнакомой ночи..." [16+]
14.15 Х/ф "Стряпуха". [0+]
15.40 Д/ф "Владимир Высоцкий. "И, улыбаясь, мне ломали крылья". [16+]
16.55 Д/ф "Высоцкий. Последний год". [16+]
17.50 "Сегодня вечером". Владимир Высоцкий. [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Д/ф "Правда о "Последнем герое". [12+]
0.00 Х/ф "Красивый, плохой, злой". [18+]
1.55 Модный приговор. [6+]
2.45 Давай поженимся! [16+]
3.25 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Тест. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор! Юмор!!! [16+]
12.20 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Город невест". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Свои чужие родные".[12+]
1.10 Х/ф "Катино счастье". [12+]
4.21 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Созвездие талантов". [6+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.50 Хоккей. "Барыс" /Нур-Султан/ - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**19.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Ради добра. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 Һылыуҡай-2020. [12+]**
**0.45 Х/ф "Однажды со мной". [12+]**
**3.00 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**5.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

### 31 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Личные обстоятельства". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.30 Ледниковый период. [0+]
16.40 Д/ф Мировая премьера. "Ванга: Человек и феномен". [12+]
17.40 Премьера. "Я почти знаменит". [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.50 Премьера. "Сегодня вечером". К 110-летию Ванги. [16+]
23.50 Д/ф "Ванга: Человек и феномен". Полная версия. [12+]
1.00 Наедине со всеми. [16+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.25, 1.30 Х/ф "Только любовь". [12+]
6.00, 3.10 Х/ф "Два билета в Венецию". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 Когда все дома.
10.10 "Сто к одному".
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Город невест". [12+]
17.30 Танцы со звездами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Көш юлы. Балалар". [6+]**
**11.45, 5.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Культура малой Родины. [12+]**
**17.30 Творческий вечер, посвященный 65-летию народного артиста БАССР Азата Аиткулова. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Правила геймера". [12+]**
**2.00 Спектакль "Мона". [12+]**
**4.45 Караоке по-башкирски. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (12) дүшәмбе | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |
| 26 (13) шишәмбе | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |
| 27 (14) шаршамбы | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 28 (15) кесе йома | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 16:13 | 17:43 | 19:13 |
| 29 (16) йома | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 16:16 | 17:46 | 19:16 |
| 30 (17) шәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 16:18 | 17:48 | 19:18 |
| 31 (18) йәкшәмбе | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Ә һыу етмәүҙең организмға зыяны бик ҙур. Тап шул сәбәпле ҡан баҫымы күтәрелә, пульс арта, аң бутала, хатта йөрәк эшмәкәрлеге боҙола. Организмдың химия реакцияһында һәм ағзалар эшмәкәрлегендә нығ сағыла.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ МОҢО ТОРҺА БИКЛӘНЕП, ЙӘШӘЙ АЛМАҪ ИНЕК ТӨКЛӘНЕП




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**3-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Окапи. Биишева. Парта. Ҡанат. Моряк. Участка. Барабан. Лапаҫ. Илбаев. Баҡыр. Ҡор. Ватан. Алла. Игәт. Лайыҡ. Ваҡыт. Июнь. Көньяҡ. Сәғәт. Әйселәү. Әминев.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Ҡармаҡ. Баяр. Ит. Бура. Көрәгә. Тунис. Олимп. Ҡатын. Верн. Реставрация. Юҡ. Мә. Ихата. Үт. Мал. Вальс. Алҡа. Алма. Кәҫ. Ноҡот.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КҮБЕРӘК ҺЫУ ЭС



**Организмға һыу етмәүе - оло йәштәгеләрҙең аңы буталыуы, хәтере насарайыуының төп сәбәптәренең береһе.**

Сан-Паулу (USP) медицина университеты доценты Арнальдо Лихтенштейн үҙенең пациенттарын оҙаҡ йылдар күҙәтеүе һөҙөмтәһендә шундай фекергә килгән. Баҡһаң, 50 йәштән һуң кешеләр һыу эсмәй башлай, дөрөҫөрәге, уға ихтыяж кәмей икән. Эскеһе килмәгәс, уның хаҡында уйлап та бирмәйҙәр. Шуға күрә ғаиләгеҙҙә оло йәштәгеләр булһа, даими рәүештә һыу тәҡдим итегеҙ. Иҫенә төшөргән кеше булмаһа, улар был хаҡта онотоуы мөмкин. Ә һыу етмәүҙең организмға зыяны бик ҙур. Тап шул сәбәпле ҡан баҫымы күтәрелә, пульс арта, аң бутала, хатта йөрәк эшмәкәрлеге боҙола. Тәү ҡарамаҡҡа кеше сәләмәт күренһә лә, һыуға ҡытлыҡ организмдың химия реакцияһында һәм ағзалар эшмәкәрлегендә нығ сағыла. Әгәр ҙә эргәгеҙҙәге оло кеше бер сәбәпһеҙ борсоулы, арыған, хәлһеҙ, тиҙ ҡыҙыусан булып күренһә, былар - уға һыу етмәүҙең төп билдәләре.

Һыу эске килмәү яҡшы түгел, шуға күрә оло йәштәге туғанығыҙҙы мәжбүрләп булһа ла өйрәтегеҙ, үҙегеҙ ҙә эсергә ғәҙәтләнегеҙ. Һыу, һут, һөт, аш эсегеҙ, ҡарбуз, ҡауын, персик, ананас, әфлисун, мандарин кеүек һыуға бай емеш-еләк ашағыҙ. Ғөмүмән, һәр ике сәғәт һайын нимә булһа ла эсеү кәрәк. Дуҫтарығыҙ, ғаиләгеҙ уларға сәләмәт һәм бәхетле булырға ярҙам итеүегеҙҙе белергә тейеш.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 ғинуар "Шәмсетдин һәм Шәмсүрә"** (Т. Ғиниәтуллин), новелла. 12+

**27 ғинуар "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+

**28 ғинуар "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**29 ғинуар "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+

**"Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашененников). 12+

**30 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

**"Йөрәктәр ҡушылды"** концерт 12+

**31 ғинуар "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 ғинуар "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), үлемһеҙлек хаҡында хикәйәт. 12+

**27 ғинуар "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 0+

**29 ғинуар "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 16+

**31 ғинуар "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 12.00 6+

**"Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30-31 ғинуар "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди) 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 ғинуар "Я научилась просто, мудро жить"** А. Ахматоваға арналған музыкаль-ижади кисә. 6+

**27 ғинуар "Һинең ҡурай моңло ла, һинең ҡурай серле лә"** А. Айытҡоловтың юбилей кисәһе. 6+

**30 ғинуар "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+

**31 ғинуар "Ҡоштар нимә хаҡында һайрай?"** концерт-әкиәт. 15.00 6+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**26 ғинуар "Ғаиләм - ҡәлғәм"** концерт. 6+

## БР Милли музейы

**31 ғинуарға тиклем "Йәм-йәшел шыршы энәләрендә ялтыр мөғжизә..."** Яңы йыл ретро уйынсыҡтары күргәҙмәһе.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Мәүлиҙә Тимербаева, Рәйлә Ҡалҡаманова, Флүрә Супанова, Гөлнара Аминова, Сәриә Теләүбирҙина, **Ҡариҙел районы** Яңы Муллаҡай ауылынан Нәзилә Әхкәметдинова, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Рәүҙәт Хәйруллин, Сәғит Кинйәбулатов, Ғәлинур Усманов, Сәүиә Ключенкова, **Мәләүез районы** Мотай ауылынан Мират Ырысҡолов, Һыртлан ауылынан Фәниә Бикмөхәмәтова, **Мәләүез ҡалаһынан** Г. Исәнғолова, **Сибай ҡалаһынан** Гөлиә Әлимғужина, Илгиз Әбдрәшитов, Ғаяз Ғәйетбаев, Рөстәм Ғиззәтуллин, Азат Иҙрисов, Анна Ионова, Нәжиә Мусина, Денис Нурғәлин, Дилә Нурғәлина, Илнур Рәшитов, Лилиә Туҡбаева, Данир Хәмзин, Шамил Янбаев, Баязит Байназаров һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Оҙон ғүмер юлығыҙ бәхеткә, ҡыуаныс-шатлыҡтарға, ҡояшлы көндәргә тулы булһын, сәләмәтлек, изгелек, уңыштарҙы юлдаш итегеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

***Ижады килтергән эҙемтәләр өсөн һәр кем үҙе яуап бирергә тейеш. Айырыуса милли символдар менән уйнарға, ғауға һәм ығы-зығы ҡуптарыу өсөн генә халыҡҡа ҡотҡо һалыу ярамай.***



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# НАСАР ВАҠИҒА, ТИП БАҺАЛАНА

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә башҡорт милли кейемендәге ярымяланғас кешеләрҙе һүрәтләгән, рәссам булырға маташҡан бер ханымдың художествоһына (йәмһеҙ ҡыланышына - Ред.) ҡарата үҙ фекерен белдерҙе:**

- Картиналар төшөрә башлаған бер ханымдың художестволарына ҡағылышлы мәсьәләгә ҡарата мин үҙ фекеремде белдерергә һәм халыҡҡа ла еткерергә теләйем, - тине Радий Фәрит улы. - Хәтерләйем, өләсәйемдең дә был "селтәр" тип аталған биҙәүесе була торғайны һәм ул уны бик ҡәҙерле ҡомартҡы итеп һаҡлай ине. Милли кейемдәр, биҙәүестәр элементтарын әлеге рәүештә һүрәткә төшөрөү уғата мыҫҡыллы. Был ханым, күрәһең, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына түгел, күпселек ҡатын-ҡыҙҙар өсөн милли кейем элементтарының бик әһәмиәтле ҡомартҡы, хазина икәнен аңламайҙыр. Аңламаһа, шул: башҡорт ҡатын-ҡыҙының был биҙәүестәрен әлегесә һүрәткә төшөрөү - хайуандарса. Был минең шәхси фекерем. Мин цензура менән шөғөлләнмәйем, был кешегә Хоҙай үҙе судья. Әммә мин функционерҙарҙан, шул иҫәптән әлеге оперативкала ултырғандарҙан да үтенәм: әйҙәгеҙ, бындай ҡыланыштар менән һағыраҡ булайыҡ. Милли мөнәсәбәттәр - бик нескә сик. Әлеге хәл милли үҙенсәлектәрҙе үтә нығ мыҫҡыллау тип ҡабул ителә. Мин бер нәмәгә лә әйҙәмәйем, әммә был бик насар ваҡиға тип иҫәпләйем. Шунлыҡтан бындай осраҡтар менән һаҡ булыуҙы һорайым. Быны аңламағандар бында ултырырға лайыҡ түгел.

* * *

Өфөлә йәшәүсе Алена Савельеваның башҡорт халҡының һәм башҡорт мәҙәниәтен яҡын күргән башҡа кешеләрҙең күнелдәрен рәнйеткән рәсемдәре мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге белгестәр тарафынан тикшереләсәк. Был маҡсатта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай түңәрәк ҡор ойоштора, тап уларға халыҡтан һүрәттәргә республика һәм федераль ҡануниәтҡә ярашлы баһа биреүҙе талап иткән ялыуҙар килгән. "Минеңсә, был осраҡта һорау хоҡуки мәсьәләләргә ҡарағанда күберәк әхлаҡ һәм этикаға ҡайтып ҡала. Бер яҡтан, әлбиттә, ижад кешеләрен ҡыҫымға алыу, үҙен күрһәтеүҙә сикләү дөрөҫ түгел. Икенсе яҡтан, ижады килтергән эҙемтәләр өсөн һәр кем үҙе яуап бирергә тейеш. Айырыуса милли символдар менән уйнарға, ғауға һәм ығы-зығы ҡуптарыу өсөн генә халыҡҡа ҡотҡо һалыу ярамай. Минең ҡарамаҡҡа, был эштәр бындай оло иғтибарға һәм улар буйынса фекер алышыуға бөтөнләй лайыҡ түгел. Әммә был тема киң яңғыраш алған, мәҙәниәт өлкәһендәге белгестәр һүрәттәргә коллегиаль баһа бирһен һәм бәхәскә нөктә ҡуйһын. Үҙ эшенең оҫтаһы булғандар фекеренә таянасаҡбыҙ. Ә бына мәсьәләгә закон буйынса баһаны рәссамдар һәм депутаттар түгел, хоҡуҡ тәртибен һаҡлаусылар бирергә тейеш. Әгәр ҙә рәсемдәрҙә ысынлап та халыҡтың абруйын кәмһетеү, халыҡ-ара дошманлыҡ сәсеүгә йүнәлтелгән элементтар барлыҡҡа иҫбатланһа, быға тейешле органдар тотонорға тейеш", - тине был турала Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ЭШЛЕКЛЕЛӘР ҘӘ...

## башҡорт милли костюмы кейә ала



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров эшлекле башҡорт милли костюмын кейеү ҡағиҙәһен раҫланы. Документ рәсми хоҡуки мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты. Ҡағиҙәләр дәүләт хеҙмәткәрҙәренә, муниципаль чиновниктарға, дәүләт органдары ведомстволарындағы ойошма етәкселәре һәм хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла.**

Радий Хәбиров Башҡортостанда эшлекле башҡорт костюмы буйынса регламент әҙерләнеүе тураһында сентябрҙә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивалендә ҡатнашҡан Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина менән осрашҡанда уҡ әйткәйне инде. Башлыҡ бойороғонда ир-егеттәрҙең стилләштерелгән эшлекле башҡорт костюмына "ярым стойка" яғалы, ҡырын ҡаптырмалы (бортлы) кәзәкей, лампаслы йәки классик салбар, бер төҫлө күлдәк (сағыу булмаған ептәр менән сигелгән булһа ла ярай), костюм төҫөндәге аяҡ кейеме инә. Бынан тыш, камзул, бик күренеп тормаған ҡушаҡ-билбау, таҡыя, балдаҡ, "печатка" кейергә мөмкин.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың стилләштерелгән башҡорт костюмына еңе өстән ике өлөштән дә кәм булмаған эшлекле күлдәк, сағыу булмаған сигеүле блузка, юбка, пинжәк йәки жилет, камзул, кейем төҫөндәге классик аяҡ кейеме тәҡдим ителә. Шулай уҡ артыҡ күҙгә салынып тормаған ювелир биҙәүестәр, бижутерия, түшелдерек, мәрйен таҡырға була.

Ир-егеттәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да костюмдары бер тонда булырға тейеш. Уларҙы ирекле стилдәге кейем (джинсы, шорты, үтә күренмәле блузка), кроссовка, шипатай, мокасин, босоножка, ҙур платформалы туфли менән бергә кейеү тыйыла.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, традицион кейемгә моданы республика Башлығы Радий Хәбиров индерҙе. Рәсәй көнө айҡанлы байрам сараларында төбәк етәксеһе Өфө модельеры Радик Хәйруллин теккән башҡорт хәрбиҙәренең традицион камзулына оҡшаған пинжәк менән сыҡҡайны. Был пинжәкте хәҙер башҡа дәүләт хеҙмәткәрҙәрендә, муниципаль чиновниктарҙа ла күрергә мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОШМАНЫҢА ТУРА ӘЙТҺӘҢ...

## дуҫыңа өлгө булыр

Йәш ғүмер, әйткән һүҙ, атҡан уҡ - кире ҡайтмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Халыҡтар зарланыуҙан туҡтаһа, фекерләүҙән дә туҡтай.

**(Наполеон).**

Дошманыңа булған нәфрәт унының бәхетенә генә түгел, һинең үҙеңдең бәхеткә лә ҡамасаулай.

**(Жан Пти-Сенн).**

Артыҡ байлыҡ яҡшыға түгел. Әгәр ҙә һинең сәғәтең бәрәү генә икән, һин теүәл ваҡытты һәр саҡ беләһен. Әгәр сәғәтең икәү икән, һин һис ҡасан дөрөҫ кенә ваҡытты белә алмайһың.

**(Ли Сегалл).**

Бөгөнгө борсолоуҙарына ул ҡәҙәре әһәмиәт бирмә, иртәгә яңылары булыр.

**(Арнольд Шенбергер).**

Әхлаҡ беҙҙе нисек бәхетле булырға өйрәтмәй, ә бәхеткә нисек лайыҡлы булырға өйрәтә.

**(Иммануил Кант).**

Кешеләргә биргән вәғәҙәмде һәр саҡ үтәргә тырышам, ә бына Хоҙай алдындағы вәғәҙәмде үтәргә онотам. Хоҙай ғәфү итә ала бит.

**(Пол ван Дерон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Дауаханаға ауыр хәлдәге өс йәшлек ҡыҙыҡайҙы алып киләләр. Хәле насарлана барған ҡыҙыҡайға тиҙ арала ҡан ҡойоу кәрәк була. Врачтар ҡыҙыҡайҙың биш йәшлек ағаһы ла ошо уҡ сир менән сирләгәнен, хәҙер уның был сирҙән арынғанын белә. Шуға ла улар тап ағаһының ҡанын һеңлеһенә ҡойоу уны ҡотҡарасаҡ, тигән ҡарарға килә. Врач ошо хаҡта әйтергә, өгөтләргә тип әсәһе менән бергә дауахана коридорында көтөп ултырған малай эргәһенә килә. Врачтың тәҡдимен ишеткәс, малай ауыр итеп көрһөнөп ҡуя, йөҙөнә бер аҙға ғына икеләнеү эҙҙәре сығара ла: "Эйе, әгәр был һеңлемде ҡотҡарһа, мин ҡанымды бирергә риза", - ти. Малайҙы һеңлеһе менән йәнәш һалалар һәм аппаратҡа тоташтыралар. Ағаһы һеңлеһенең йөҙөнән күҙҙәрен алмай күҙәтә, уға ярҙам итә алыуына һөйөнөп йылмая. Бына бер ваҡыт ул ҡапыл йылмайыуҙан туҡтай һәм етди төҫкә инеп, врачҡа баға һәм: "Ә мин ҡасан үлә башлайым?" - тип һорай. Баҡтиһәң, малай ҡанын һеңлеһенә биргәс, үҙе үлергә тейеш икән, тип аңлаған һәм шуға ҡарамаҫтан, һеңлеһен ҡотҡарырға ризалашҡан икән... Бәләкәй баланың үҙен ҡорбан итергә һәләтле булыуы һоҡландыра..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21004

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 37/01